ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

11-17 сентябрь (һарысай)

2026

№36 (1231)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2027 йылдың беренсе яртыһы өсөн 1 сентябрҙән 1230 һум 42 тингә яҙыла башларға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәткеле менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Беренсе класс уҡыусылары...

нисек мәктәпкә өйрәнә?



6

Каруанһарайға - 180 йыл



7

Телендән һөйөн, ағай!



8-9

Дауалай тип ышанып...

күрәҙәсегә, сихырсыға барма берүк



12

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ЕТӘКСЕ МЕНӘН КҮҘМӘ-КҮҘ

ЙӨҘ КӨН КҮП ТҮГЕЛ, ЛӘКИН...

Баш ҡалалағы бар ваҡиғалар, бар яңылыҡтар, шулай уҡ ҡала етәкселәре башҡарған ғәмәлдәр, теге йәки был тема буйынса яңғыратҡан фекерҙәре, яһаған һығымталары "Киске Өфө", "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости" тигән баш ҡала гәзиттәре биттәрендә, шулай уҡ Өфө телевидениеһында сағылыш таба. Был юлы ла беҙ, өс баш мөхәррир һәм Өфө телевидениеһы журналисы Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Динислам улы ШӘРИПОВ менән осрашып, уның был вазифаны 100 көн башҡарыу осорон билдәләп, әңгәмәләшеп алырға йыйылдыҡ. Һәр хәлдә, ҡала башлығының ошо осорҙа башҡарған эштәре беҙҙең ҡәләм осонда булды һәм уның бөгөнгө ауыр шарттарҙа һәр етәксегә хас ауырлыҡтарҙы үҙ иңенә алып, уларҙы хәл итергә бик етди тотоноуына шаһитбыҙ.

"Вечерняя Уфа" гәзитенең баш мөхәррире Вячеслав Головтың әңгәмәбеҙҙең башында уҡ "Әйҙәгеҙ, йөҙөбөҙгә йылмайыу сығарып һөйләшәйек!" тип тәҡдим итеүен Рөстәм Динислам улы ла хупланы һәм йылмайып, шулай тип яуапланы:



- Эйе, йылмайып һөйләшәйек. Әгәр ҙә беҙ проблемалар өҫтөндә ни эшләргә белмәй, йөҙ емереп ултырһаҡ, ул проблемаларҙың хәл ителеше икеләнеү генә тыуҙырырға мөмкин. Барыһы ла насар тип зарланабыҙ икән, тимәк, барыһы ла насар буласаҡ һәм әленән-әле алдыбыҙға килеп баҫҡан ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға көсөң дә, дәртең дә ҡалмаясаҡ. Минән: "Һеҙҙең көсөгөҙ ниҙә?"- тип һорағандары бар, мин һәр ваҡыт ярымшаяртып: "Минең көсөм йылмайыуҙа", - тип яуап бирәм. Йылмайыулы йөҙ менән әйләнә-тирәләгеләрҙе үҙеңә ыңғай юҫыҡта ылыҡтырып, шулай уҡ үҙеңдә лә психологик яҡтан ышаныслы итеп көйләп була.

(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

11 сентябрь - Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли кейеменә арналған көн. Был байрам хәҙер матур йолаға әүерелеп бара. Ә һеҙ үҙегеҙҙең ырыу-тамғағыҙҙы һәм милли кейемегеҙҙе белә(һе)геҙме?



Гөлнара НУРҒӘЛИНА, медицина хеҙмәткәре, Ишембай ҡалаһы: Башҡорт милли кейеменә һоҡланмау мөмкин түгел. Һәр ырыуҙың кейеме үҙенсә матур, зауыҡлы һәм бай. Милли кейемгә һөйөү миндә бәләкәйҙән һаҡлана. Йылдар үтеү менән ҙур теләгемде тормошҡа ашырып, үҙемдең юрматы ырыуына тап килгән костюм тегеп кейҙем. Бал итәкле күлдәгемде, уҡалар, көмбәҙҙәр менән биҙәлгән еләнемде кейеп, ғорур атлап урамдарҙан үтеүемде күргән яҡташтарымдың шаҡ ҡатҡанын, һоҡланғанын күреү үҙе бер ҡыуаныс миңә. Түш биҙәүестәрем - һаҡалым, сылбырҙарым боронғо фотолар буйынса эшләнгән. Һаҡалдың өҫкө өлөшө - селтәр. Аҡыҡ таштар, көмбәҙ һәм тәңкәләр менән биҙәлгән был биҙәүестең төп нөсхәһе Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы музейҙа һаҡлана. Шулай уҡ беҙҙең юрматыларға хас уҡа иҙеү ҙә эшләнгән. Уның төп нөсхәһен Өфөләге музейға 1984 йылда Ишембай районы Кинйәкәй ауылынан минең күрше инәй Мәрйәм Сәлишева тапшырған.

Беренсе ҡашмау менән селтәремде бынан егерме йыл элек тегеп алған инем. Ҡашмау шулай уҡ музей өлгөһөнә ҡарап эшләнһә, селтәремдең төп нөсхәһе Ишембай районы Байғужа ауылында Нурия апай Камалетдинова-ла һаҡлана. Ғөмүмән, һәр тегелгән милли кейемем - тулы реконструкция. Музейҙарҙа һаҡланған ҡомартҡыларҙы, боронғо фотоларҙы, башҡорт милли кейеме тураһындағы китаптарҙы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән, ентекләп өйрәндем. Ошо эҙләнеүҙәр, ҡыҙыҡһыныуҙар барышында районыбыҙҙың талантлы оҫталары менән таныштым. Милли кейемдәр тегеү буйынса халыҡ-ара марафонда ла ҡатнашырға насип булды. Һәм беҙ, Ишембай ҡыҙҙары, артабан да бергә ижад итеү теләге менән "Ете ҡыҙ" төркөмөн барлыҡҡа килтерҙек **(һүрәттә)**. Быйыл беҙҙең берләшеүгә биш йыл булып та китте. Әлеге ваҡытта беҙ юрматыларҙың ғына түгел, башҡа ырыу кейемдәрен дә тергеҙеү өҫтөндә эшләйбеҙ. Башҡортостандан тыш, башҡа өлкәләрҙә үткән ярыш, конкурстарҙа ҡатнашып торабыҙ. Милли кейемдәрҙе тергеҙеп, улар буйынса төрлө эҙләнеү эштәре менән дә шөғөлләнеп, мәҙәниәтебеҙҙең яҡты бер нурын һундермәй, тағы ла нығыраҡ балҡытыу өсөн тырышабыҙ.

12+

✓ *Баш ҡала - республиканың арҡа мейеһе. Оло йортҡа ни кәрәк, кесеһенә лә шул кәрәк, тигәндәй, баш йортта еткерелгән бурыс-маҡсаттар беҙҙең төбәктәрҙә атҡарылаҫаҡ эштәрҙең дә планына нигеҙ булып ята бит инде.*

ЕТӘКСЕ МЕНӘН КҮҘМӘ-КҮҘ

ЙӨҘ КӨН КҮП ТҮГЕЛ, ЛӘКИН...

(Башы 1-се биттә).

Барлыҡ фотоларҙа ла бик етди күренәһегеҙ. Ә йылмайғанда һеҙ - бөтөнләй икенсе кеше. Шуға ла ошондай тәҡдим яңғыратырға йөрьәт иткәйнек...

- Ул фотоларҙа мин түгел, тип шаяртайым әле. Ысынлап та, юғары кимәлдәге чиновник барыбер үҙен һәр саҡ бер сик эсендә тоторға тейеш. Яҙылмаған ҡағиҙә был. Райондарҙа эшләгәндә лә, әлбиттә, бындай яуаплылыҡ инде булды. Ләкин баш ҡалала, бигерәк тә эште башлаған ғына осорҙа, һинең тышҡы ҡиәфәтең дә, нисек кейенеүең, үҙеңде нисек тотоуың да - барыһы ла барыһының да күҙәтеүе аҫтында. Хатта һин эштән һуң, ғаиләң менән урамда йә магазинда йөрөп ятҡанда ла, кемдер килеп сәләм бирә, кемдер фотоға төшөргә тәҡдим итә - былар барыһы ла һине бер көсөргәнештә, бер сиктә тота. Бына шуға ла һин күп осраҡта үҙ асылында түгел, шуға ла һеҙ әйткән фотоларҙағы етди йөҙ минеке түгел, тием.

Ә бөгөнгө осрашыуға килгәндә, 100 көн әллә ни күп ваҡыт түгел, мин хакимиәт бинаһы коридорҙарында аҙашырға, ҡул аҫтында эшләгәндәрҙең барыһын да танып бөтмәҫкә лә мөмкинмен. Ә шулай ҙа ниндәйҙер һығымталар яһарға булалыр.

Үҙегеҙҙең Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнеү хәбәрен нисек ҡабул иттегеҙ, беренсе уй-тәьҫорат ниндәйерәк булды?

- Минең хеҙмәт кенәгәһендә Бөрйән, Хәйбулла муниципаль райондары хакимиәттәре башлығы вазифаларында эшләүем теркәлгән бит инде. Ул тәғәйенләнеүҙәрҙе мин нисектер тыныс, баш тартыу мөмкинлеге булмағанын аңлап ҡабул иткәнмен. Бөрйәндә, мәҫәлән, хакимиәт башлығы урынбаҫары булып эшләй инем. Хакимиәт башлығы Динир Әхмәтйәнов иртән Өфөгә китте, ә кисен уның республиканың урман хуҙалығы министры итеп тәғәйенләнеүен ишетәбеҙ. Иртәгәһенә иртән мине лә Өфөгә саҡыртып, район хакимиәте етәксеһе дилбегәһен ҡулға тотороп ҡайтарҙылар *(Әйткәндәй, мин Бөрйән һәм Хәйбуллала үткән тәжрибә мәктәбе һабаҡтары өсөн ошо райондар халҡына, хеҙмәттәштәремә сикһеҙ рәхмәтлемен).*

Әлбиттә, һине берәү ҙә ирекһеҙләп тәғәйенләп ҡуймай вазифаға, ләкин әлеге лә баяғы яҙылмаған ҡағиҙә буйынса, бындай тәҡдимдән баш тартмайҙар. Шуға, Өфөгә эшкә саҡырыуҙы ла баш тартмай торған тәҡдим булараҡ ҡабул иттем.

Өфө минең өсөн ят ҡала түгел. Бала сағым ошонда үтте - мин Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡыным. Аҙаҡ алыҫ райондарҙа эшләргә тура килһә лә, аҙна һайын тиерлек Өфөгә килдек, республика, баш ҡала кимәлендәге төрлө йыйылыш, форум, башҡа сараларҙа ҡатнашып, ошо мөхиттең эсендә ҡайнаныҡ. Баш ҡала - республиканың арҡа мейеһе. Оло йортҡа ни кәрәк, кесеһенә лә шул кәрәк, тигәндәй, баш йортта еткерелгән бурыс-маҡсаттар беҙҙең төбәктәрҙә атҡарыласаҡ эштәрҙең дә планына нигеҙ булып ята бит инде.

Ә шулай ҙа Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһын үтәй башлағас, һеҙҙең өсөн иң тәүҙә нимә көтөлмәгәнсә булды?

- Өфөләге хәл ителәһе проблемалар, ауырлыҡтар тураһында хәбәрҙәр инем, әлбиттә. Ләкин мине ҡаланың проблемаларын хәл итеү өсөн кәрәкле финанс мөмкинлектәренең сикләнгән булыуы аптыратты. Мин икенсерәк күҙ алдына килтергәйнем, мөмкинлектәр киңерәктер, тип уйлағайным. Хәйбулла районында, мәҫәлән, былай уҡ бюджет ҡыҫынҡылығы һиҙелмәне. Уның бюджеты ҡайһы бер бәләкәй ҡалалар менән сағыштырғанда тотороҡлораҡ, үҫеш динамикаһы көслө булды. Ниндәйҙер мәсьәләне хәл итеү мөмкинлеге һәр саҡ табыла ине. Мәҫәлән, бер етәксе килеп, шул-шул күперҙе йүнәтергә, мәктәп түбәһен алыштырырға кәрәк, ти. Беҙ был эштәрҙе атҡарыу ысул-сараларын таба инек.

Өфөнөң бюджеты райондарға ҡарағанда унар тапҡырға ҙурыраҡ, ләкин ул - миллионлы ҡала һәм бында мәсьәләләр киң масштабта хәл ителә. Проблемалар бер үк, ләкин финанслауға өҫтәлгән нулдәр төрлөсә. Мәҫәлән, Бөрйәндә һәм Хәйбуллала беҙ миллиондар менән һөйләшһәк, Өфөлә миллиардтар менән һөйләшәбеҙ, тип шаяртып әйтеп ҡуям. Мәҫәлән, Хәйбуллала бәләкәй бер йылға аша өс йөҙ миллионға күпер төҙөп була, ә Өфөләге Ағиҙел аша күпер төҙөүгә 10 милллиард кәрәк. Бөгөн минең башымда ошо миллиардтарҙы нисек табырға тигән һорау ҡайнай. Мәҫәлән, быйыл ШОС һәм БРИКС сараһын үткәргән ваҡытта тотонолған 1,2 миллиард кредитты түләп ҡуйыу талап ителә. Шулай уҡ сүп-сар полигонын, юл, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ объекттарын төҙөүгә, яңыртыуға ла бик күп миллиардтар кәрәк. Шуға ла бөгөнгө командаға ауырлыҡтарҙан сығыу юлын эҙләргә, ҡала үҫеше туҡталмаһын, ҡала халҡы комфортлы йәшәүҙе дауам итһен өсөн ошондай ауыр шарттарҙа ла финанс мөмкинлектәрен табырға тура киләсәк.

Бөгөн иң беренсе сиратта ҡышҡылыҡҡа әҙерләнеү, километрҙарға һуҙылған инженер селтәрҙәрен тәртипкә килтереү мәшәкәттәре өйөлгән бит инде. Һеҙ был өлкәләге эштәргә барлау үткәрҙегеҙме, ниндәйҙер хәүеф-маҙар күрәһегеҙме?

- Һәр ҡаланың йәшәйеш циклы бер үк инде: әле генә беҙҙең мәғариф учреждениеларын яңы уҡыу йылына әҙерләнек, уҡыусыларҙың хәүефһеҙлеге тураһында хәстәрләнек. Капиталь ремонт программаһына бәйле Өфөнөң 16 белем биреү учреждениеһы балаларға яңы формматта асылды. Был эштәрҙең беҙҙең өсөн бик етди һынау икәнен беләһегеҙ. Белем биреү учреждениелары 140 мең баланы яңыртылған һәм сағыу төҫтә ҡаршы алһын өсөн дөйөм тырышлыҡ менән мөмкин булғандың барыһын да эшләнек.

Эйе, хәҙер төп бурыс - йылытыу миҙгелен иҫән-имен генә башлап ебәреү. Беҙҙең көндәлек оперативкалар урынбаҫарым Сергей Кожевниковтың тап ошо мәсьәлә тураһындағы отчетынан башлана. Бөгөнгө көндә йылылыҡ селтәрҙәренең 80 проценттан ашыуы һынауҙар үткән. Ҡайҙалыр ниндәйҙер урында һаман торба-ҡорамалдар алыштырыу дауам итә. Һыу, йылылыҡ системаһының 60 проценты туҙған шарттарҙа авариялар юл ҡуймау - тәүге бурысыбыҙ.

Ҡаланың байрамдар үткәреү тигән матур традицияһы бар бит инде...

- Ҡайһылыр бер етәксе булдырғайны был байрамды, нимәнелер уйлап сығарғайны, тиеү бик үк дөрөҫ түгелдер. Сөнки төрлө креатив идеялар, акциялар, проекттар күберәк халыҡтың үҙенән килә. Шуға ла ниндәйҙер байрам саралары үткәрер өсөн дә халыҡты ишетергә, уларҙың тәҡдимен хуплай белергә кәрәк, тим. Күптән түгел бына Ҡашҡаҙанда "Һөт иле" шаулап-гөрләп үтеп китте, ул киләсәктә лә дауам итер. Йәштәребеҙ Ағиҙел буйына "Самауырлы ритайым"ға сыға - белеүемсә, был матур сараны улар үҙҙәре тәҡдим итеп, үҙҙәре ойоштора башлаған. "Әйҙәфест" тигән урам театрҙары фестивале, "Өфө муйынсағы"нда үтә торған спорт саралары - улар барыһы ла ҡала халҡын да, туристарҙы ла йәлеп итә торған байрамдар һәм уларҙы хупларға кәрәк.

Өфөбөҙ илдең башҡа баш ҡалаларынан ни яғы менән айырылырға тейеш тип уйлайһығыҙ?

- Күп ҡалаларҙа булһам да, уларҙы ныҡлап өйрәнеү тәжрибәм бик юҡ. Ә шулай ҙа Өфөнөң башҡаларҙан айырып торған һыҙаттарын әйтә алам. Беренсе, ул өс яҡлап та йылға менән уратып алынған, ҡояш та бик үк төшмәгән төпкөл Бөрйәндә тыуғанмын. Хәйбуллаға күскәйнем, унда дала. Шул саҡта, мин ағасһыҙ-урманһыҙ Хәйбуллала үҙемде яланғас һымаҡ, яҡлауһыҙ, һаҡлауһыҙ һымаҡ хис итәм, тип шаярта торғайным. Хәҙер бына Өфөләмен. Йәғни алтын урталыҡтамын: Бөрйәндә - урман-тауҙар, Хәйбуллала - дала, Өфөлә самалап быларҙың икеһе лә бар.

Урам атамаларын тәртипкә килтереү, уларға республика тарихында бөйөк эштәре менән урын алған танылған һәм күренекле шәхестәр исемен ҡушыу кеүек мәлдәргә лә иғтибарҙы арттырырға кәрәк ине. Мәҫәлән, әлегәсә күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы һәм ғалим Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев исемендәге урам юҡ икән...

- Эйе, быуындар алышына, ололарға алмашҡа йәштәр килә. Хәтер эстафетаһы тигән нәмә бик мөһим - йәштәр тарихи үткәндәрҙе, күренекле шәхестәрҙе белһен өсөн беҙҙең дә айырым эш-хәстәрҙәребеҙ булырға тейеш. Һеҙ, журналистар, был мөһим эшкә үҙ өлөшөгөҙҙө индерәһегеҙ, әлбиттә. Гәзит биттәрендәге яҙма менән генә сикләнеп ҡалмаҫҡа, мәҫәлән, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев күренекле шәхестәрҙең исемен баш ҡала урамына ҡушыу буйынса тәҡдимде Өфө ҡала Советындағы комиссия иғтибарына яҙма рәүештә еткерергә кәрәк. Шулай уҡ мәҙәни мираҫты, милли колоритты һәм үҙлекте һаҡлау буйынса ла күберәк яҙырға, һөйләргә, яҙылғандарҙың шул уҡ йәштәр күҙенә эләгерлек булыуына өлгәшергә кәрәк.

Өфөнөң йәшеллек буйынса уникаллеге тураһында һүҙҙе дауам итеп, йәмәғәтселектә борсолоу тыуҙырған бер хәл - урамдарҙағы ҙур ағастарҙы ҡырҡып, йәштәренә алыштырыу тураһында ла фекерегеҙҙе белгә килә.

- Шаяртып алайым әле. Мин бит инде урман баҫып алған тауҙар менән уратып алынған, ҡояш та бик үк төшмәгән төпкөл Бөрйәндә тыуғанмын. Хәйбуллаға күскәйнем, унда дала. Шул саҡта, мин ағасһыҙ-урманһыҙ Хәйбуллала үҙемде яланғас һымаҡ, яҡлауһыҙ, һаҡлауһыҙ һымаҡ хис итәм, тип шаярта торғайным. Хәҙер бына Өфөләмен. Йәғни алтын урталыҡтамын: Бөрйәндә - урман-тауҙар, Хәйбуллала - дала, Өфөлә самалап быларҙың икеһе лә бар.

Ҡала халҡын аңларға була. Аңлатыуһыҙ-ниһеҙ урамдарҙағы ағастарҙы ҡырҡа башлау дөрөҫ түгел, етмәһә, сәләмәттәрен ҡырҡыу, ҡарт ағастар урынына ултыртылған йәш ағастарҙың ерегеп китә алмай ҡороған осраҡтары ла булған. Ысынында, ҡарт ағастар иртәме-һуңмы ауып төшәсәк, уларҙы алыштырырға кәрәк. Былай ҙа көслөрәк

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Радий Хәбиров Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Өфө уҡыусыларының 23-27 августа Алматыла үткән Youth Physics Battles (YPhB) халыҡ-ара турнирындағы ҡаҙаныштарын билдәләне һәм Өфөнөң 83-сө инженер лицейынан Андрей Камскийҙы, Сибайҙың 3-сө лицейынан Владислав Иҫәнбаевты һәм Өфөнөң 161-се лицейынан Богдан Середаны шәхсән ҡотланы. "Ҡаҙағстан, Рәсәй, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан һәм Кипрҙан 100-гә яҡын уҡыусы фәнни алыштар форматында математика, физика, химия һәм информатиканан белемен һынаны. Уҡыусыларыбыҙ һөйөндөрҙө!" - тине Радий Хәбиров.

✓ Рәсәй Президенты Владимир Путин күп балалы ғаиләләр өсөн йорт һатып алыуға йәки төҙөүгә ипотека буйынса льготалы ставканы кәметеү идеяһын хупланы. Бындай башланғыс менән бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Мария Львова-Белова сығыш яһаны. Омбудсмен уны фатирға ҡарағанда бер аҙ кәметергә тәҡдим итте. Президент был идеяны хуплап, һуңғы йылдарҙа илдә шәхси торлаҡ төҙөлөшө күләме ярайһы уҡ артыуын, тәҡдим ителгән сара ла төҙөлөш тармағын үҫтереүгә өҫтәмә этәргес биререн билдәләне.

✓ 14 сентябрҙән Башҡортостанда "Урман" операцияһы башлана. Урмансылар рөхсәтһеҙ ағас ҡырҡыуға ҡаршы рейдтарға сыға. Улар лицензия һәм рөхсәт ҡағыҙының булыу-булмауын тикшерәсәк. Урман хеҙмәте инспекторҙарына хоҡуҡ һаҡлау органдары, шул иҫәптән юл полицияһы ярҙам итәсәк. Патрулдәр тәүлек буйына урмандарҙан сығыу урындарында һәм хәүефле урман участкаларында дежурҙа торасаҡ. "Урман менән файҙаланыусыларҙың һәм йөк машиналары водителдәренең ағас әҙерләү һәм ташыу өсөн рөхсәт документтарының булыу-булмауын тикшерәләр", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығында.

✓ Асҡын, Ауырғазы һәм Балаҡатай райондарында заманса модель китапханалары эшләй башланы. Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһе барышында уларҙың эшенә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров фатихаһын бирҙе. Мәҙәниәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда биш йыл эсендә "Ғаилә" милли проекты сиктәрендә яңы формматтағы 22 китапхана эш башлаған. Ошо маҡсатҡа федераль бюджеттан 177 миллион һумдан ашыу аҡса бүленгән. "Был китапханалар райондарҙа йәшәүселәрҙе йәлеп итеү нөктәһе булыр, тип өмөтләнәбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

✓ ***Төҙөүселәр адресына ла дәғүә белдермәй булмай. Улар бөгөн коммерция торлаҡтары төҙөү менән артыҡ мауыға, ләкин ул йорттарҙа йәшәйәсәк кешеләрҙең социаль ихтыяжы тураһында онота.***



елдән һуң ағастарҙың автомобилдәргә, электр сымдарға ауған хәлдәр тураһында ишетәбеҙ, уларҙы тергеҙеү өсөн күпме аҡса түгелә. Шуға ла башта халыҡҡа был эштәр хәүефһеҙлектән сығып башҡарыла икәнен аңлатырға кәрәк.

Ҡала тормошоноң ниндәй өлкәләренә яңырыу уҡ булмаганда ла, талап ителгән иғтибар йүнәлтелесәк?

- Ҡала халҡын, әлбиттә, иң тәүге сиратта юлдар менән бәйле хәл борсой. Шулай уҡ күперҙәр төҙөләшө менән бәйле стратегик мәсьәләләрҙе хәл итәһе бар. Мәҫәлән, өс-дүрт йыл эсендә Ағиҙел аша Затон күперен төҙөүгә 10 миллиард тирәһе аҡса табыу бурысы тора. Ул проектты республика, хатта Федераль ярҙамһыҙ тормошҡа ашырыу мөмкин түгел.

Ҡала транспорты буйынса проблемаларҙы ла иғтибарҙан ситкә ҡуйып булмай. Трамвай-троллейбус-автобус паркын яңыртырға, рельс юлдарын ремонтларға кәрәк. Беләһегеҙ, бер саҡ республика Башлығы Радий Хәбиров пассажирҙар ағымын көйләү өсөн Өфөнөң тарихи үҙәге менән төньяҡ өлөштө бәйләүсе, метроға альтернатива булырҙай ҡала электричкаһы тураһында идея яңғыратҡайны. Был "Ер өҫтө метроһы" проекты тураһында фекер алышыуҙар бара, тик барыһы ла шул финанс табыу мәсьәләһенә барып терәлә.

Ҡала ихаталарындағы тротуарҙарға, юлдарға иғтибар итеү вәкыты ла еткәндер. Был эштәргә идара итеүсе компанияларҙы ла йәлеп итеп, уларҙың финанслауҙа ҡатнашыуына өлгәшергә тигән теләк бар. Ысынында, закон буйынса ихата биләмәләрен, юлдарын төҙөкләндереү идара итеүсе компанияларҙың вәкәләттәренә инә инде ул. Тик был тормошҡа ашырылмай, ихаталарҙағы соҡор-саҡырҙарға улар тарафынан ҡалдыҡ принцибы буйынса ғына аҡса бүленә. Идара итеүсе компанияларҙы ошо бурыстарын үтәүгә ҡыҙыҡтырыу өсөн ниндәйҙер нисбәттә муниципалитеттың да финанс яр-ҙамын тәҡдим итергә тигән ҡарарға килдек. Һәр хәлдә, Өфө халҡы мәнфәғәттәрендә бер ҡарарға килербеҙ тип уйлайым.

Ҡыҫҡаһы, Өфөнө тәртипкә килтерергә кәрәк. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, социаль объекттар буйынса ла һорауҙар бар. Мәҫәлән, ҡала эсендә мәктәптәр етерлек, әммә Йылҡыбай, Нуғай, "Цветы Башкирии" ҡасабаларында ла мәктәптәр төҙөү кәрәк. Проектлағанда, мотлаҡ халыҡтың ихтыяжын, иҫәбен дә күҙҙә тотоу мотлаҡ. Юҡһа, Нуғайҙағы 1200 урынға иҫәпләнгән мәктәптә 4 меңдән ашыу бала уҡый. Был юл ҡуйылғыһыҙ хәл.

Бында беҙҙең төҙөүселәр адресына ла дәғүә белдермәй булмай. Улар бөгөн коммерция торлаҡтары төҙөү менән артыҡ мауыға, ләкин ул йорттарҙа йәшәйәсәк кешеләрҙең социаль ихтыяжы тураһында онота. Был ҡала төҙөлөшө нормаларын да боҙоу тигән һүҙ. Был хәлгә лә беҙ күҙ йома алмайбыҙ.

Шулай ҙа һеҙҙең мауығыуҙар, ғаиләгеҙ тураһында ла белге килә. Өфөлә һеҙ яратҡан урындар барҙыр, улар ниндәйерәк тәьҫораттар менән бәйләнгән?

- Әйткәнемсә, мин йылғаһы, тауҙары, ҡалын урмандары булған ауылда үҫтем. Тәбиғәт ҡосағында булыуҙар беҙҙең ғәҙәти хәл-торошобоҙ, был сәйәхәттәр иркенлек, азатлыҡ, мөғжизәле бер донъяны танып-белеү шатлығы бирә. Бына шулай мин дә бала саҡтан урман-тауҙарҙы гиҙеү, балыҡ тотоу менән мауыҡтым, был мауығыуым әле булһа дауам итә. Әммә мин, Бөрйәндәге күпселек ир-егеттәр кеүек, һунарсы түгелмен. Мылтығым булһа ла мин унан хатта бер ҡошҡа ла атманым. Мылтыҡты, моғайын, текә ир-егет булып күренеү теләгенән генә алғанмындыр ҡулға.

Мауығыуҙарымдан шахматта уйнауҙы әйтергә лә булалыр. Бала саҡтан атайым менән уйнаным, төрлө кимәлдәге ярыштарҙа ла ҡатнаштым. Шулай уҡ футболда ла, волейболда ла, өҫтәл теннисында ла уйнайым. Хәҙер бына улдарым да минең ошо мауығыуҙарымды дауам итә, тиергә мөмкин. Әле генә мәктәпкә барған уртансы улымды махсус рәүештә шахмат секцияһына бирҙек. Улдарым өсәү. Иң олоһо 6-сы класҡа уҡырға барҙы. Бәләкәйе - балалар баҡсаһында.

Өфөнөң күңелгә иң яҡын урыны, әлбиттә, 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты урынлашҡан Рәсәй урамы, "Йүрүҙән" туҡталышы тирәһе инде. Гимназияла уҡығанда беҙ күберәк шул биләмәнән Ҡала советы туҡталышына тиклем генә сығып йөрөй, көн дә иртән йүгерә торғайныҡ. Хәҙер иһә улдарым тартылған, уларға оҡшаған урындарҙы, парктарҙы күңелгә яҡын итәм.

ШУЛАЙ ИТЕП...

"Идара итеүселәр тәжрибәһе" тигән хеҙмәттә: "Өс айҙа ысын етәксе хәл-торошто тулыһынса өйрәнә, киҫкен мәлдәрҙе асыҡлай, ҡул аҫтындағы команданың ышанысын яулай һәм тәүге һөҙөмтәләр күрһәтә ала", - тигән һығымта күҙгә ташланды. Баш ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын 100 көн генә атҡарыуына ҡарамаҫтан, уға бирелгән һорауҙарҙан Рөстәм Шәриповтың Өфөбөҙгә ҡағылышлы һәр мәсьәләне етәксе, кеше, патриот булараҡ ҡабул иткәнен аңлап, уға һәр беребеҙ эстән генә ихлас уңыштар теләнек.

Гөлфиә ЯНБАЕВА,
Галина ИШМӨХӘМӘТОВА,
Вячеслав ГОЛОВ.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

ХЕҘМӘТ ШАРТТАРЫ ЯҠШЫ



Башҡортостанда ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев исемендәге пилотһыҙ осоу аппараттары батальоны сафын тулыландырыу дауам итә.

Ир-егеттәр Оборона министрлығы менән БПЛА операторҙары һәм был подразделениеның башҡа һөнәрҙәре буйынса хеҙмәт итеү өсөн әүҙем контракт төҙөй. Ошо йәһәттән башҡорт дроноводтар батальонын ойоштороу инициативаһы менән сығыш яһаған республика Башлығының РФ Милли гвардияһы ғәскәрҙәре менән үҙ-ара эш итеү буйынса кәңәшсеһе Артур Йомағужин Ватанға хеҙмәт итергә теләк белдергән һәр кемгә үҙ рәхмәтен белдерә.

"Кем һаман икеләнә, шуны әйтергә теләйем: был етди аҙым, һәм уға, ысынлап та, яуаплы ҡарарға кәрәк. Батальонға яҙылыу - илебеҙҙең бөтөнләй яңы хәрби көсөн формалаштырыуҙа ҡатнашыу, хәрби тарихыбыҙҙың яңы битен яҙыу бит ул", - ти Артур Йомағужин.

Яңы подразделениеға яугирҙар күп кимәлле аттестация аша һайлап алына, йәш буйынса ла талаптар бар. Медицина тикшереүе һөҙөмтәһенә ҡарап, комиссия хеҙмәткә яраҡлы тип тапһа, дәғүәсе, Оборона министрлығы менән бер йылға контракт төҙөгәндән һуң, махсус уҡыу үҙәгендә күнекмәләр үтә.

Себер тарафтарында эшләп йөрөгән егет ("Орел" ("Бөркөт") позывнойлы яугир) Башҡортостанда яңы батальон төҙөлөүе хаҡында интернеттан уҡып белә һәм уның сафына яҙылырға ҡарар итә. Исемле батальондың төҙөлөүен бик вәкытлы һәм мөһим сара тип иҫәпләй ул. Сөнки БПЛА операторҙары бөгөн армияла - төп хәрби белгестәрҙең береһе. Улар разведка алып бара, штурм төркөмдәренең уңышлы һөжүмен тәьмин итә, яралыларға ярҙамға килә.

Батальонда хеҙмәт итеү, лайыҡлы түләүҙән тыш, ветеран исеме, дәүләт наградалары алыуҙы грантиялай, хеҙмәткә урынлашыуҙа һәм вуздарға уҡырға инеүҙә льготалар ҙа бирә. Шулай уҡ студенттар өсөн махсус шарттар билдәләнгән. Вуздарҙа белем алыусылар, академик ял юллап, контракт төҙөргә мөмкин, ә хеҙмәттән һуң бюджетҡа күсеү хоҡуғына эйә.

Хеҙмәт итеү вәкыты аныҡ билдәләнгән, һәм ул теүәл бер йыл тәшкил итә. Аҙаҡ яугир хеҙмәтен ҡалдыра йәки Оборона министрлығы менән яңы контракт төҙөй ала.

Һайлап алыу һәм контракт төҙөү шарттары буйынса тулыраҡ мәғлүмәт өсөн телефондар: +7 (908) 358-00-00 һәм +7 (995) 948-65-41.

Әйткәндәй, Махсус хәрби операция биләмәһендә Салауат районынан "Башҡорт" позывнойлы коптер тибындағы БПЛА өлкән операторы хеҙмәт итә. Дрон операторы билдәләүенсә, пилотһыҙ аппараттар менән идара итеү күнекмәләре бөгөн армияла ғына түгел, ә граждандарҙың эшмәкәрлек өлкәләрендә лә талап ителә. БПЛА подразделениеларында хеҙмәт итеү заманса юғары технологиялы компетенциялар бирә, ти ул. Муниципалитет хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, "Башҡорт" 2024 йылда РФ Оборона министрлығы менән килешеү төҙөгән. Быға тиклем ир-уҙаман тыуған ауылында механизатор булып эшләгән. Хәҙер уның бурыстары - разведка, артиллерия утын коррекциялау, дошман позицияларына һөжүм итеү, шулай уҡ алғы һыҙыҡҡа боеприпастар һәм медикаменттар ташыу.

Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республикала халыҡтың 92 проценты юғары тиҙлекле интернет менән тәьмин ителгән. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Республика етәксеһе мәғлүмәттәре буйынса, 2026 йылдың аҙағына тиклем йәнә 110 ауыл мобиль интернет һәм ышаныслы элемтә менән тәьмин ителәсәк, уларҙың яртыһынан ашыуы - "Һанлы тигеҙнеҙлектә бөтөрөү 2.0" федераль проекты сиктәрендә. Ауылдарҙы халыҡ үҙе билдәләй, йыл һайын Дәүләт хеҙмәттәре порталында ошо проект буйынса тауыш биреү уткәрелә. БР Башлығы билдәләүенсә, төп трассалар һәм юлдар янында тоторокло интернет һәм элемтә булдырыу өҫтөндә эш алып барыла.

✓Стәрлетамаҡ троллейбус идаралығы ошо көндәрҙә үҙенең 65 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Транспорт предприятиеһы 1961 йылдан эшләй. Башҡортостанда тәүге троллейбус тап Стәрлетамаҡта, Өфөгә ҡарағанда бер йылға иртәрәк, линияға сыға. Көн һайын предприятие 12 троллейбус һәм 4 автобус маршрутын хеҙмәтләндерә, йылына 11 миллионға яҡын пассажир ташый. Юбилей айҡанлы республика Башлығы Радий Хәбиров транспорт идаралығына урта класлы 10 "Паз Вектор Next" автобусын тапшырҙы.

✓Башҡортостан Республикаһы "Йәштәр һәм балалар" милли проекты ярҙамында уҙғарылған Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһы һөҙөмтәләре буйынса тәүге тапҡыр илдең тәүге биш субъекты исемлегенә инде. Олимпиадала ҡатнашыу осрағы миллиондан ашҡан, һуңғы этапта 193 уҡыусы үҙ көсөн һынаған, биш йыл эсендә еңеүселәр һәм призерҙар һаны 78-гә еткән. Башҡортостан уҡыусылары йыл һайын химия, математика, яһалма интеллект, экология һәм иҡтисад буйынса халыҡ-ара олимпиадаларҙа уңышлы сығыш яһай. 2026 йылда Стәрлетамаҡтан Руслан Әминев Ҡытайҙағы халыҡ-ара иҡтисади олимпиадала көмөш миҙал яуланы.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың йәш ғалимдары өсөн гранттар системаһын үҙгәрткән указға ҡул ҡуйҙы. Документ 2 сентябрҙән көсөнә инде. Хәҙер йәш тикшеренеүселәр ике йыл дауамында ғилми эштәр башҡарыу өсөн финанслау алырға мөмкин. Бынан тыш, грант алыусылар даирәһе аныҡланды. Ярҙам 35 йәшкә тиклемге ғалимдарға - республикала теркәлгән дәүләт юғары уҡыу йорттары һәм ғилми ойошмаларҙың фән кандидаттарына, аспиранттарына бирелә. Документ шулай уҡ йәш ғалимдарға дәүләт ярҙамы күрһәтеү өсөн Башҡортостан Республикаһының Гранттар буйынса советы составын яңырта.

✓ *Хәҙер ойошма исемдәренән алып эш графигына тиклем бөтә мәғлүмәт ике дәүләт телендә: башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылырға тейеш. Ике текст та йөкмәткеһе һәм күләме буйынса бер төрлө булырға тейеш.*

ҠЫҪҠАСА

АЛДАҒАНДАР!

Өфөлә контракт буйынса хәрби хеҙмәткәрҙәрҙән аҡса урлауға махсуслашҡан кешеләр төркөмө эшмәкәрлеге туҡтатылды. Оператив-эҙләү саралары барышында 2025 йылдың ғинуарынан 2026 йылдың апреленә тиклем дүрт кешенән торған төркөмдөң мутлыҡ ҡылыуы асыҡлана. Енәйәтселәр Рәсәй Федерацияһы Оборона министрлығы менән контракт төҙөгән кешеләргә тәғәйенләнгән аҡсалата түләүҙәрҙе урлай. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, зыян күреүселәрҙең береһе - Мәләүез ҡалаһында йәшәүсегә килтерелгән зыян суммаһы 3 миллион 400 мең һумға яҡын тәшкил иткән. Материал процессуаль ҡарар ҡабул итеү өсөн тәфтиш органдарына тапшырылды. Енәйәт ҡылыусыларға Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 159-сы статьяһы 4-се өлөшөндә ҡаралған енәйәт эше ҡуҙғатылған. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, енәйәт ҡылған ваҡытта ҡулға алынғандарҙың береһе патруль-пост хеҙмәте хеҙмәткәре булған, ағымдағы йылдың майында ул эске эштәр органдары хеҙмәткәренең намыҫын хурлаған өсөн эштән бушатылған.

✓ **Башҡортостандың дәүләт автоинспекцияһы начальнигы Владимир Севастьянов төбәк халҡына транспорт саралары менән идара итеүсе бәлиғ булмағандар тураһында хәбәр итергә саҡырҙы.** Быға сираттағы ваҡиға - Дүртөйлө районында мотоциклда йөрөгән үсмер юл билдәһенә бәрелеп һәләк булыу фажиғәһе сәбәпсе булды. Ведомство етәксеһе билдәләүенсә, мотоцикл менән тейешле категориялы водитель таныҡлығы булған осраҡта һәм закон менән билдәләнгән йәштән генә идара итергә рөхсәт ителә. Идара итеү хоҡуғы булмаған кешегә идара итеүҙе тапшырыу техника хужаһы өсөн административ яуаплылыҡҡа килтерә. Һаулыҡҡа йәки үлемгә ауыр зыян килтереү ҡурҡынысы менән бәйле булһа, закон бәлиғ булмағандарҙы уның ғүмере өсөн хәүеф тыуҙырған ғәмәлдәргә йәлеп иткән өсөн енәйәт яуаплылығын (азатлыҡтан мәхрүм итеүгә тиклем) күҙ уңында тота. Дәүләт автоинспекторы граждандарҙы үсмерҙәрҙең питбайкта, мотоциклда һәм башҡа техникала йөрөү осраҡтарын теркәргә һәм был хаҡта БР буйынса Эске эштәр министрлығының ышаныс телефоны буйынса хәбәр итергә саҡырҙы: 8(347)279-32-92.

✓ **Өфөлә IV "ГеоВызов" халыҡ-ара геология чемпионаты уҙа. Ярыштарҙа Рәсәйҙең 19 төбәгенән һәм донъяның 13 иленән 300-ҙән ашыу студент ҡатнашты.** Башҡортостан намыҫын Өфө фән һәм технология һәм Өфө нефть техник университеттары, Октябрьский нефть һәм Аҡъяр тау колледждары студенттары яҡланы. Барлығы 40 команда көс һынашты. Программа 12 ҡатмарлы этаптан торҙо. Еңеүселәр Рәсәйҙең геология тармағы предприятиеларында стажировка үтеү мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Чемпионатты ойоштороусылар булып Роснедра һәм республика Хөкүмәте сығыш яһаны. "Башҡортостан - уникаль геологик биләмә: беҙҙә иң боронғо һәм иң йәш тау тоҡомдары йәнәшләп килә, ер аҫты ғәйәт ҙур байлыҡтарға эйә. Әммә иң мөһиме - быуындар күсәгилешлеге, уңышлы карьераның төп факторы булған эш биреүселәр һәм төрлө илдәрҙән һәләтле йәштәр араһында бәйләнештең нығыуы", - тип билдәләй Башҡортостан Республикаһының тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

КЕМДЕ ҺАЙЛАЙБЫҘ?



Республиканың һайлау системаһы 2026 йылдың сентябрендә үтәсәк һайлауҙарға әҙерлек эшен тамамлай. Депутатлыҡҡа кандидаттарҙы теркәү этабы тамамланды, тип билдәләне Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Азат Ғәлимханов.

Башҡортостанда 39 һайлау кампанияһы ойоштороla. Атап әйткәндә, Дәүләт Думаһы депутаттарын һайлау, 28-се округ буйынса Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутатын өҫтәмә һайлау, урындағы үҙидараның вәкиллекле органдары депутаттарын һайлау буйынса 37 кампания, шул иҫәптән Өфө ҡала округы советы депутаттарын, Ауырғазы һәм Белорет райондарының ике ауыл биләмәһе советы депутаттарын һайлау, шулай уҡ урындағы үҙидараның вәкиллекле органдары депутаттарын өҫтәмә һайлау буйынса һайлау кампаниялары.

Башҡортостан биләмәһендә бер мандатлы округтар буйынса Дәүләт Думаһы депутаттарын һайлауҙа төрлө партияларҙан 45 кандидат теркәлгән. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутатын өҫтәмә һайлауҙа инһә 5 кандидат (өсәүһе партияларҙан һәм ике кандидат үҙ-үҙен күрһәткән).

Өфө ҡала советы депутаттарын һайлауҙа берҙәм ҡала һайлау округы буйынса биш сәйәси партия күрһәткән кандидаттар исемлеге теркәлгән. Бер мандатлы һайлау округтары буйынса 87 кандидат теркәлгән, шул иҫәптән партияларҙан 86 кандидат һәм бер кандидат үҙ-үҙен күрһәткән. Урындағы үҙидара органдарына төп һәм өҫтәмә һайлауҙа 198 кандидат теркәлгән.

Һайлауға әҙерлекте Башҡортостан Республикаһының Үҙәк һайлау комиссияһы, 69 территориаль һайлау комиссияһы, 3249 участка һайлау комиссияһы алып бара, шуларҙың 41-е граждандарҙың ваҡытлыса килеү урындарында эшләйәсәк.

ҮҘЕБЕҘҘЕКЕЛӘР ӘШЛӘҺЕН ИНЕ

Рәсәйҙә миграция сәйәсәте өлкәһендәге ҡануниәтте үҙгәртеү киләсәктә эш хаҡының артыуына һәм социаль инфраструктураға йөкләмәнең кәмеүенә килтереүе ихтимал. Был хаҡта "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында Башҡортостан Башлығының республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Константин Шаһиморатов белдерҙе.

Уның әйтеүенсә, сит ил белгестәре ағымының кәмеүе эш биреүселәрҙе хеҙмәткәрҙәргә ихтыяж һаҡланған урындарҙа хеҙмәт хаҡын арттырырға мәжбүр итәсәк. "Беҙ эш хаҡының артыуын күрербеҙ, сөнки эшсе көскә ихтыяж булған өлкәләрҙә һуңғы ҡулланыусы өсөн тауарҙар һәм хеҙмәттәр хаҡының билдәле бер артыуы көтөлә, сөнки миграция факторы һәм хеҙмәттең арзанлығы юҡҡа сығасаҡ", - тине спикер.

Башҡортостан Башлығының төбәк парламентындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле социаль инфраструктураға йөкләмәнең кәмеүе ихтималлығын билдәләне. Атап әйткәндә, төбәктәрҙең сит ил граждандарына медицина ярҙамы күрһәтеүгә сығымдарын миҫалға килтерҙе. "Әгәр медицина тармағы буйынса ҡараһаҡ, мәҫәлән, Пермь крайында йәлеп ителгән сит ил хеҙмәткәрҙәрен дауалауға 200 миллион һум самаһы аҡса тотонолдо, Свердловск өлкәһендә - 30 миллион самаһы", - тип аңлатма бирҙе ул.

Шаһиморатов һүҙҙәренсә, сит ил белгестәре ағымын ҡыҫҡартҡанда бүленгән средстволар төбәк бюджеттарында ҡалырға йәки Рәсәй граждандарының ихтыяждарына йүнәлтелергә мөмкин. Әммә хеҙмәт баҙарына яңы шарттарға яраҡлашыу һәм кадрҙар әҙерләү системаһын үҙгәртеп ҡороу өсөн ваҡыт кәрәк буласаҡ. "Минеңсә, тәүге өс йылда ниндәйҙер үҙгәртеп ҡороу, күсеү осоро булыр, унан һуң беҙ был сәйәсәттең һөҙөмтәһен системалы күҙәтә алырбыҙ", - тине Шаһиморатов, "Башинформ" хәбәрсеһенең һорауына яуап биреп.

АЛТАҠТАЛА ХАТА БУЛМАҺЫН!

Республикала "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" законды үтәү маҡсатында методик тәҡдимдәр әҙерләнгән. Документта алтаҡталар, күрһәткестәр һәм рәсми документтар өсөн берҙәм талаптар билдәләнгән.

Хәҙер ойошма исемдәренән алып эш графигына тиклем бөтә мәғлүмәт ике дәүләт телендә: башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылырға тейеш. Ике текст та йөкмәткеһе һәм күләме буйынса бер төрлө булырға тейеш: тәржемәлә ҡыҫҡартыу йәки ябайлаштырыу тыйыла.

Биҙәлеш йәһәтенән төп талап: шрифт, хәрефтәрҙең ҙурлығы, төҫө ике версия өсөн дә бер төрлө булырға тейеш. Горизонталь урынлаштырылғанда һулда - башҡортса, уңда - русса текст. Ә вертикаль урынлаштырылһа, өҫтә - башҡортса, аҫта русса текст тора.

Тәҡдимдәрҙә башҡорт алфавитын дөрөҫ ҡулланыуға айырыуса иғтибар бүленә. Ә, ө, ү, ҫ, ҙ, һ, ҡ, ғ, ң хәрефтәре хатаһыҙ яҙылырға тейеш, сөнки хәҙер улар телдәр тураһында законды тупаҫ боҙоу тип һанала.

Автоматик тәржемә сервистарына ышанырға ярамай, профессиональ лингвистар хеҙмәтенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. БР Фәндәр академияһының Башҡорт энциклопедияһы институтында йә "БашТәржемә" автоматлаштырылған тәржемә системаһында консультация алырға мөмкин.

ИКМӘК БУЛҺА...

Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республикала ураҡ эштәренең барышы хаҡында һөйләнеләр.



Бөгөнгә Башҡортостанда сәсеү майҙандарының 50 процентын ашыуы йыйып алынған, был - 1 миллион гектарҙан күберәк, тип хәбәр итте БР вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. "Иген һәм ҡуҙаҡлы иген культуралары майҙандарының 77 проценты сабылған, яҡынса 970 мең гектарҙа һуғылған. Республиканың 34 районында игендең 70 процентын ашыуы йыйып алынған, 16 районда инһә 50 процентын күберәге, - тип асыҡлыҡ индерҙе ауыл хужалығы министры. -

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Өфөнөң "Салауат Юлаев" командаһы 2026/2027 йылдар миҙгеленә команда капитаны һәм уның ассистенттары менән таныштырҙы. Һаҡсы Григорий Панин 10-сы йыл рәттән Өфө командаһының капитаны булып ҡала. Уның ассистенттары - һөжүмселәр Вадим Шипачев, Джек Родуолд һәм Владислав Ефремов. Команданың 39 йәшлек яңы уйынсыһы Шипачев башлыса йәш уйынсылар менән эшләйәсәк, команданың дисциплинаһын контролдә тотасаҡ. Магнитогорскиҙа миҙгел алды турнирында капитанды алмаштырған һаҡсы Никита Зоркин беренсе тапҡыр ассистент итеп тәғәйенләнде.

✓ Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Тирлән урмансылығында 10 гектар урман яна. Әбйәлил (43,2 гектар), Ейәнсура (23 гектар), Йылайыр (5 гектар) урмансылыҡтарында янғындың артабан таралыуы туҡтатылған. Әбйәлил, Әүжән, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән, Йылайыр, Ейәнсура, Инйәр, Кананикольск, Күгәрсен, Тирлән, Учалы, Хәйбулла урмансылыҡтары биләмәһендә янғын хәүефе класы күтәрелеүгә бәйле 8 сентябрҙән 28 сентябргә тиклем сикләү режимы индерелә. Сикләүҙәр ғәмәлдә булған осорҙа урмандарҙа янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙоу административ һәм хатта енәйәт яуаплылығына килтерә.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте төбәк дәүләт хеҙмәттәре исемлегенә үҙгәрештәр индерҙе. Атап әйткәндә, исемлек тәмәке һәм никотинлы продукция менән ваҡлап һатыуҙы лицензиялауҙы регламентлаусы пункт менән тулыландырыла. Хеҙмәт күрһәтеү буйынса вәкәләттәр БР Сауҙа һәм хеҙмәт министрлығына йөкмәтелә. Хеҙмәт РФ Һалым кодексына ярашлы түләүле нигеҙҙә күрһәтелә. Үҙгәреш 2026 йылдың 1 октябренән үҙ көсөнә инә. Йәғни тәмәке һәм вейп продукцияһы менән ваҡлап һатыу итеү өсөн түләп лицензия алырға кәрәк була.

✓ Республика Хөкүмәте ҡарамағындағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия буйынса комиссиянан хәбәр итеүҙәренсә, конкурста 32 кандидат, шул иҫәптән 29 автор һәм 3 ижади коллектив ҡатнаша. Уларҙың эштәре менән Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы сайтында танышырға мөмкин. Фекер алышыуҙар 22 сентябргә тиклем дауам итә. Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия - Башҡортостандың журналистары эшен баһалаған иң абруйлы наградаларҙың береһе. 2024 йылдан уның суммаһы 500 мең һум тәшкил итә.

✓ Республикала яңы уҡыу йылы алдынан ғаиләләргә ярҙам хәйриә кампанияһына йомғаҡ яһалды. Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 5,7 меңдән ашыу ғаиләнән 9,5 меңгә яҡын бала ярҙам алған. Улар иҫәбендә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар ғаиләһенән ике меңдән ашыу бала бар. Йыйылған рюкзактарҙың, форманың һәм канцелярия тауарҙарының дөйөм хаҡы 14,8 миллион һум самаһы тәшкил иткән. Акцияла 1,3 меңдән ашыу кеше һәм ойошма ҡатнашҡан.

✓ *Зеленский Уиткофф менән Кушнерҙың тәҡдимен ҡабул итмәй икән, ул АҠШ тарафынан күрһәтелеп килгән хәүефһеҙлек гарантияһынан ҡолаҡ ҡағасаҡ. Зеленскийҙың коррупцияла ғәйепләнеүе лә бик ихтимал.*

Бөгөнгә 2,706 миллион тонна иген һуғып алынған, шуның 969 мең тоннаһы - ужым культуралары".

Республика буйынса игендең уртаса уңышы - бер гектарҙан 28 центнер. Иң юғары уңыш Саҡмағош районында күҙәтелә, уның аграрийҙары һәр гектарҙан 43,7-шәр центнер ашлыҡ йыя. Уларҙан Ҡырмыҫҡалы районы игенселәре лә бик ҡалышмай, һәр гектарҙан 42,9 центнер иген һуғып ала. Башҡортостанда яҙғы иген культураларына килгәндә, әлеге ваҡытта улар 692 мең гектар самаһы майҙанда һуғылған - был пландың 71 проценты. 1,740 миллион тоннанан ашыу иген йыйып алынған, гектарынан уртаса уңыш 25,1 центнер тәшкил итә. Башҡортостанды һәм илде иген менән тәьмин итеү "Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген технологик тәьмин итеү" милли проектының маҡсаттарына тап килә. Шул уҡ ваҡытта төбәктең ҡайһы бер хужалыҡтары ҡарабойҙай йыйыуға тотонған да инде. Әлегә сәсеү майҙандарының 27 проценттан ашыуы һуғылған. Ҡарабойҙай уңышы 9 мең тонна тәшкил итә.

СОЦИАЛЬ ЯРҘАМ КЕМГӘ?

Башҡортостанда социаль контракт нигеҙендә адреслы социаль ярҙам күрһәтеү тәртибенә үҙгәрештәр индерелде.

Документҡа республика премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған. Төп яңылыҡ - социаль контракт төҙөүҙең өҫтөнлөклө тәртибен билдәләү. Тәү сиратта ярҙамды ишле ғаиләләр, балалы ғаиләләр, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары аласаҡ.

Шулай уҡ алыусылар даирәһе киңәйтелә. Хәҙер социаль контрактҡа хәрби хеҙмәттән бушатылған һәм эшһеҙ йәки эш эҙләүсе тип танылған хәрби хәрәкәттәр ветерандары дәғүә итә ала. Йән башына уртаса килем баһаланмай, ярҙам бер тапҡыр һәм "Ватанды һаҡлаусылар" фонды тәҡдиме менән генә күрһәтелә. Әгәр ветеран I йәки II төркөм инвалиды тип танылһа, контракт төҙөү хоҡуғы хәләл ефетенә тапшырылырға мөмкин.

Бынан тыш, социаль контракттың ғәмәлдә булыу ваҡыты ярҙам төрөнә ҡарай: эш эҙләүгә - 9 ай, үҙ эшеңде асыуға йәки шәхси ярҙамсы хужалыҡ алып барыуға - 12 ай, ауыр тормош хәлен еңеп сығыуға - 6 айға тиклем. Документ ҡарарҙар ҡабул итеү процесын тиҙләтә: хәҙер ғариза 10 эш көнө эсендә ҡарала. Шулай уҡ эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге өсөн өҫтөнлөклө йүнәлештәр исемлеген киңәйтә (унда 21 йүнәлеш, шул иҫәптән IT, медицина, мәҙәниәт һәм социаль өлкә).

ҒАРИЗА БИРЕП ӨЛГӨР!



Йыл башынан Башҡортостанда 22 меңдән ашыу кеше социаль ярҙам алыу ысулын үҙгәрткән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ғаризалар 1 октябргә тиклем ҡабул ителә. Яңы вариант 2027 йылдың ғинуарынан ғәмәлгә индерелә.

Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан бүлексәһе мәғлүмәттәре буйынса, әлеге көндә республикала федераль льготаға хоҡуҡлы 354 меңдән ашыу граждан (инвалидтар, инвалид балалар, һуғыш һәм хәрби хәрәкәттәр ветерандары, чернобылселәр һәм башҡалар) иҫәпләнә. Уларҙың 38 проценттан ашыуы дарыуҙар, шифаханаларға путевкалар һәм бушлай барып ҡайтыу мөмкинлеге менән файҙалана. Ҡалғандары социаль хеҙмәттәр йыйылмаһын аҡсалата ала. Социаль хеҙмәттәр йыйылмаһын алыу ысулы ҡәнәғәтләндерһә, ғариза яҙыу талап ителмәй - ул автоматик рәүештә һаҡлана.

2026 йылда социаль хеҙмәттәр йыйылмаһының хаҡы айына 1825,25 һум тәшкил итә. Шуның 1405,85 һумы - дарыуҙар менән тәьмин итеүгә, 217,48 һумы - шифахана-курорт дауалауына, 201,92 һумы ҡала яны тимер юл транспортында һәм ҡала-ара транспортта дауаланыу урынына бушлай барыу ҡайтыуға йүнәлтелә. Шул уҡ ваҡытта льготник үҙе файҙаланған хеҙмәттәргә хоҡуғын һаҡлап ҡалырға, ә ҡалғандары өсөн аҡса алырға мөмкин. Социаль хеҙмәттәр алыу ысулын үҙгәртеү өсөн ғаризаны "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы аша, күп функциялы үҙәктә йәки Рәсәй Социаль фондының БР буйынса бүлексәһендә бирергә була.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

ҒАУҒА ҠУПҺА, ҠАРАҠҚА ФАЙҘА

Сентябрҙең тәүге аҙнаһы ла үтеп китте. Донъя кимәлендә һәм Рәсәй буйынса ошо ваҡыт киҫәге эсендә иң беренсе иғтибарҙы йәлеп итеүсе сәйәси ваҡиғаларҙың береһе АҠШ президенты вәкилдәренең Мәскәүгә рәсми визиты булғандыр.

Әлбиттә, ҡайһы бер эксперттарҙың, был визит бер ниндәй яңылыҡ та килтермәне, тип әйтеүҙәренә ҡарамаҫтан (сөнки хәҙер шул бер үк маҡсат менән нисәнсе тапҡыр килеп ҡайтыуҙары!), Владимир Путиндың Стив Уиткофф һәм Джаред Кушнер менән өс сәғәттән ашыу һөйләшеүҙәрен ыңғай баһалаған баҫмалар һәм сәйәсмәндәр ҙә күп. Мәҫәлән, Украина Юғары радаһы депутаты Александр Дубинский фекеренсә, Дональд Трамптың махсус илселәре Рәсәй менән конфликттың тамамланыуы буйынса Зеленскийға "ультиматум" белдереүҙәре лә ихтимал. Уйын осоро тамамланды, ти ул, хәҙер ҡарар ҡабул итергә кәрәк. Ә инде Зеленский Уиткофф менән Кушнерҙың тәҡдимен ҡабул итмәй икән, ул АҠШ тарафынан күрһәтелеп килгән хәүефһеҙлек гарантияһынан ҡолаҡ ҡағасаҡ. Әгәр Зеленский ультиматумды кире ҡаҡҡан хәлдә, уның коррупцияла ғәйепләнеүе лә бик ихтимал, ти Дубинский. Ә бына Bloomberg баҫмаһы яҙып сығыуынса, Уиткофф менән Кушнерҙың Мәскәүгә күп һанлы килеп китеүҙәре прогресс килтермәне һәм был һуңғыһына ла әллә ни өмөт юҡ, сөнки Кремль үҙенең иң беренсел хәрби маҡсаттарынан баш тартасағын белдермәне.

Трамп илселәре сәфәренә әҙ генә булһа ла оптимизм менән ҡараусы берҙән-бер матбуғат баҫмаһы The American Conservativ журналы булды. Уның махсус күҙәтеүсеһе Трамп хакимиәтенең Рәсәй менән АҠШ араһында диалогты тергеҙеүгә ынтылыш күрҙе һәм был Үҙәк разведка идаралығы директоры (ЦРУ) Джон Рэтклиффтың Мәскәүгә визитынан һуң айырыуса һиҙелә, тип яҙҙы.

Һәм, ысынлап та, Рәсәй эксперттары һыҙыҡ өҫтөнә алыуынса, Уиткофф менән Кушнер сәфәрен фәҡәт украин конфликты менән генә бәйләү дөрөҫ булмаҫ ине, сөнки Кремлдә булған һөйләшеүҙәрҙән күренеүенсә, Мәскәү менән Вашингтон араһында ике яҡлы мөнәсәбәттәрҙе тергеҙеү мәсьәләһенә ҙур иғтибар бирелде. "Трамптың яҡын ярҙамсылары менән Кремлдә булып үткән осрашыуҙы ҡәҙимге тип әйтеүе ауыр, - ти Дәүләт Думаһының Халыҡ-ара эштәр буйынса комитет рәйесе урынбаҫары Алексей Чепа, - сөнки беҙ уның байтаҡҡа һуҙылған тәнәфестән һәм күп кенә башҡа хәлдәрҙән һуң башланыуын күрәбеҙ. Шулай уҡ ике яҡтан да ыңғайға көйләнеш тә күрәбеҙ". Эйе, был йәнә лә шунан да күренде: Америка делегацияһы составында санкция өсөн яуаплы чиновниктарҙың да булыуы сәйәси даирәләрҙә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Былар бөтәһе лә АҠШ менән Рәсәй араһындағы мөнәсәбәттәр кимәлен тергеҙеү файҙаһына һөйләй. Ҡыҫҡаһы, Кремлдәге осрашыу Украина менән Европа позицияһын да асыҡ күҙаллау йәһәтенән һөҙөмтәле булмаҡсы. "Минеңсә, - ти Федерация Советының Халыҡ-ара эштәр буйынса комитет рәйесе Григорий Карасин, - Америка илселәре артабанғы аҙым яһау өсөн Киевҡа ярайһы яҡшы "багаж" менән йүнәлде." Шул уҡ ваҡытта Карасин Киев властарының тиҫкәрелеген дә күҙ уңында тотоуын, ләкин Вашингтондың бындай хәлгә йоғонто яһарына ышанысын белдерҙе.

Әшулай ҙа Financial Times гәзите яҙыуынса, АҠШ президентының тыныслыҡ илселәре визитына ҡарамаҫтан, Украина конфликтты көйләү буйынса һөйләшеүҙәргә иҫәп тота, тип әйтеп булмай. Һәм, ысынлап та, Зеленский Уиткофф һәм Кушнер менән осрашыу барышында Донбастан баш тартырға риза булмауын белдерҙе. Өҫтәүенә, ул киләһе йыл АҠШ-тың Patriot комплекстары өсөн ракеталар етештереү ниәтен белә һәм бынан Украинаға ла өлөш сығырына өмөтләнә. Ә уны Рәсәй Хәрби-космос көстәренең яуап һөжүме һөҙөмтәһендә Украинаның бөтөн Ҡара диңгеҙ порттары бикләнеүе лә, сәнәғәт предприятиелары-ның күпселек өлөшө харабаға әйләнеүе лә, логистика элемтәһе эшләмәү сәбәпле, магазин кәштәләренең бушап ҡалыуы ла борсомай - Зеленскийҙың унда эше юҡ, сөнки Киев режимы үҙ аҡсаһына һуғышмай: "һуғышырға теләүселәр коалицияһы" ҡоралға һәр саҡ аҡса табасаҡ. Ҡыҫҡаһы, Европа һәм Киев һаман да "һуғышырға теләүселәр" шойҡаны аҫтында. Американист-сәйәсмән Малек Дудаков фекеренсә, 2027 йылдың йәйенә конфликтты көйләү буйынса һөйләшеүҙәр шарттары Рәсәй файҙаһына бик ныҡ үҙгәреүе ихтимал. Хәйер, киләсәк ни күрһәтер...

Киң мәғлүмәт сараларында бер йыл эсендә генә лә ҡорал һатып алыуы менән бәйле коррупцион схемалар арҡаһында Украинаның 1,2 млрд доллар самаһы зыян күреүе хаҡында хәбәрҙәр йөрөй. Был хаҡта, мәҫәлән, аудитор тикшереүҙәре һөҙөмтәләренә һылтанып, NewYork Times гәзите яҙып сыҡҡан. "2024 йылда Украина мутлыҡтар, дәүләт аҡсаһын туҙҙырыу һәм битарафлыҡтар арҡаһында 1,2 млрд доллар самаһы юғалтҡан", - тип хәбәр итә баҫма. Бынан алдараҡ Америка киң мәғлүмәт сараларында Зеленскийҙың коррупцион янъялдар арҡаһында украиндар ышанысын юғалта барыуы хаҡында материалдар булғайны. Халыҡ аҡылы, ғауға ҡупһа, ҡараҡҡа файҙа, тип белмәй әйтмәгән икән шул...

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө йылытыу миҙгеленә 98 процентҡа әҙер. Өфөлә 5138 күп фатирлы йорттоң 112-дә һәм 666 социаль учреждениеның 17-дә йылытыу системаларын тикшерергә ҡалған. Был хаҡта мэриялағы оператив кәңәшмәлә ҡала тормошон тәьмин итеү идаралығы етәксеһе Антон Тристан белдерҙе. Әлеге ваҡытта объекттарҙың 30 процентҡа яҡынының әҙерлек паспорты бар (1037 объектҡа 487 акт). Шул иҫәптән идара итеү компаниялары 262 паспорт алырға тейеш, 66 - социаль учреждениеһы, сауҙа биналары - 202, бөтәһе 1130 объект. 15 сентябргә улар тулыһынса әҙер буласаҡ, тип билдәләне Антон Тристан.

✓ Баҡсала үҫтерелгән уңышты һатыу өсөн Өфөнөң Киров районында Ғафури урамы, 50; Менделеев урамы, 7/3; Эшсе хәбәрселәр урамы, 20 һәм Мөбәрәков урамы, 10/1 адрестары буйынса уңайлы сауҙа майҙансыҡтары булдырылған. Был хаҡта ҡала хакимиәтенән хәбәр итәләр. Бындай сауҙа урындары Өфөнөң төрлө райондарында барлыҡҡа килә һәм ҡала халҡы араһында тотороҡло һорау менән файҙалана.

✓ Өфөлә урындағы башланғыстарға ярҙам программаһы сиктәрендә Нугай ҡасабаһының Офицер урамындағы юл участкаһына асфальт түшәлгән. Яңыртылған юлдың дөйөм оҙонлоғо 270 метр тәшкил итә. Шулай уҡ 141-се мәктәп биләмәһендә заманса спорт майҙансығын төҙөкләндереү тамамлана. Уның дөйөм майҙаны - 300 квадрат метр. Эштәр барышында бордюралар ҡуйылған, хәүефһеҙ резина япма түшәлгән һәм заманса спорт комплексы монтажланған.

✓ Быйыл көҙ Өфөнөң Ботаника баҡсаһында ғәҙәти булмаған тәбиғәт күренешен - үҫемлектәрҙең икенсегә сәскә атыуын күҙәтергә мөмкин. Унда - сирень, тубылғы, баҡса йәсмине, ҡыҙылтал, лаванда, кейәү үләне, ә Өфөлә һәм уның тирә-яғында ер еләге, гөлйемеш, алма ағастары сәскәләнгән. Белгестәр аңлатыуынса, был феномендың сәбәбе һауа торошо һәм стресс факторҙары менән бәйле. Ҡоролоҡтан йәки һыуыҡтан һуң һауа торошо үҙгәрә, һәм үҫемлек уны яңылыш яҙ етте тип ҡабул итә. Ҡартайған ҡыуаҡтарҙа һәм ағастарҙа гормональ баланстың үҙгәреүе лә быға сәбәпсе булыуы ихтимал. Матур күренеш булһа ла, үҫемлектәр өсөн зыянлы ул.

✓ "Тормош өсөн инфраструктура" милли программаһының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә быйыл Башҡортостанда 152 ҡала һәм ауыл биләмәһе тәртипкә килтерелә, тип хәбәр иттеләр Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығынан. Шулар араһында Өфөнөң Октябрь районындағы Рихард Зорге исемендәге скверын комплекслы төҙөкләндереү дауам итә.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ *Ата-әсәләргә, аҡрын яраҡлашыу - ул холоҡ йомшаҡлығы һәм насар тәрбиә билдәһе түгел, был баланың нервылар системаһына әлеге ваҡытта ныҡлы терәк булыр ҡосаҡлауҙарығыҙ, уҡытыусының яҡлауы кәрәк, тигәнгә сигнал.*

РУХИӘТЕБЕҘ



БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ...

сер һәм мәғлүмәт сығанағы

Донъя өс өлөштән тора, тип иҫпләгән ата-бабаларыбыҙ. Иң юғары баҫҡыста - Һауа, унда Тәңре йәшәй. Көн (Ҡояш), Ай, уларҙың ире Самрау; Тимер Ҡаҙыҡҡа бәйләнгән Һарат менән Буҙат һәм уларҙың артынан ҡыуысы алты ас бүре лә Күктә. Уртансы ҡатлам - Ерҙә кеше, уның ярҙамсылары Толпар, йәнлектәр, ҡоштар (шоңҡар, торна, аҡҡош, күгәрсен), шулай уҡ өй, тау, урман, ут эйәләре йәшәй. Ер йәки һыу аҫты - төрлө ғифриттәр, һыу эйәләре, Сәмреғош һәм башҡа йәндәр донъяһы. Улар, үҙ сиратында, изге (Аҡбуҙат, торна, балыҡ) һәм яуыз (дейеү, ауырыу эйәләре һ.б.) һәм бер кемгә лә зыян килтермәгән (тау, йылға эйәләре) көстәргә бүленә.

Донъяның ошондай бүленеше матди мәҙәниәт предметтарының барыһында ла, шул иҫәптән торлаҡта, көнкүреш әйберҙәрендә, кейемдә сағылыш тапҡан. Милли кейемдә өҫкө донъя баш кейеме һәм арҡаның өҫкө өлөшө кимәлендә сағыла. Баш кейемдәре ҡоштарҙы ла хәтерләтеп ҡуйған, ә ҡоштар иһә - һауаның, яҡтылыҡтың, тормоштоң күҙалланышы. Ҡашмауҙы ғына алып ҡарайыҡ. Уның алғы өлөшө ҡоштоң суҡышы, арҡала ҡойроғо, алға төшөп торған биҙәүестәр ҡоштоң ҡанаты. Әйткәндәй, ҡолаҡ эргәһенән аҫҡа ҡарай төшөп торған сулпылар күп халыҡтарҙың баш кейеме өсөн хас.

Урта донъя арҡаның өҫкө өлөшөнән кейемдең итәгенә тиклем сағыла һәм ул Ерҙең үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһының байлығын һәм матурлығын күрһәтә. Сигеү, аппликация ярҙамында кейемдең ошо өлөшө үҫемлектәр, сәскәләр, йәнлектәр һыны менән биҙәлә. ***Түбәнге донъя - күлдәктең аҫҡы өлөшө, шулай уҡ аяҡ кейеме. Был донъя кешене ҡурҡыта, ундағы яуыз көстәр кешенең ғүмерен, сәләмәтлегенә зыян килтерә, тип ышанғандар. Бигерәк тә йәш ҡатындарҙың кейеменә иғтибар бирелгән, сөнки милләттең киләсәге улар тыуҙырған һәм тәрбиәләгән һау-сәләмәт быуындың ҡулында. Шуға ла ата-бабаларыбыҙ ҡыҙҙарҙың һәм йәш ҡатындарҙың һаулығын һаҡларға тырышҡан. Шуның өсөн дә ҡатын-ҡыҙҙың кейеме ниндәйҙер мәғәнәгә эйә булған төрлө биҙәктәргә бай.***

Айгөл КАМАЛИЕВА.
"Башҡорт костюмы" китабынан.
(Дауамы бар).

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

БЕРЕНСЕ КЛАСС УҠЫУСЫЛАРЫ...

нисек мәктәпкә өйрәнә?

Өфө мәктәптәрендә быйыл 12 меңгә яҡын бала беренсе тапҡыр парта артына ултырҙы. Уларҙың ата-әсәләре өсөн психологтар "адаптация" тип атаған бик мөһим этап башлана. Өлкән категориялы медицина психологы Регина ХӘЛФИНА нисек итеп беренсе класс балаһының күңелендә уҡыу процесына һәм мәктәпкә ҡарата һөйөү уятыу тураһында кәңәштәре менән бүлеште.



- Ғилми-практик йәһәттән халыҡ-ара нормативтар юҡ: балаларҙың ҡайһы берһе мәктәпкә бер нисә аҙна эсендә өйрәнәсәк, ә икенселәренә ярты йыл кәрәк буласаҡ. Был уларҙың темпераментынан, һаулығынан, уҡытыусы менән булған мөнәсәбәттәренән һәм өйҙәге мөхиттән тора. Әммә тикшеренеүҙәр өс типик яраҡлашыу осрағын күрһәтә: тиҙләштерелгән - 5-6 аҙнаға тиклем; уртаса - 2-4 ай; аҡрын - тәүге ярты йыллыҡтың аҙағына тиклем.

Тиҙләштерелгән яраҡлашыу: бала - бәләкәй батыр. Бер айҙан уҡ ул тыныс ҡына дәрестәргә бара, класташтарының исемдәрен белә һәм күҙ йәштәрһеҙ генә мәктәп хәлдәре хаҡында һөйләй.

Ата-әсәләргә кәңәш: баланы артыҡ йөкләмәгеҙ. Уның дәрестәрҙән һуң хәле ҡала икән, был тиҙ арала уны роботехника, инглиз теле һәм хоккей түңәрәгенә яҙырға кәрәк икәнлеген аңлатмай. Ятып тороу йәки урамда уйнап килеү өсөн кәмендә ике сәғәт буш ваҡыт ҡалдырығыҙ. Төп хәүеф - ололарҙың ҙур өмөттәре арҡаһында баланың Яңы йылға тиклем үк эмоциональ "яныуы".

Яраҡлашыуҙың уртаса ваҡыты: кәйеф "тирбәлеүҙәре". Бала мәктәпкә йөрөй, әммә һәр иртә өгөтләүҙәрҙән башлана. Ул тиҙ арый, мыжыҡ йә үтә актив, әлегә уның дуҫтары бер-икәү генә. Был иң йыш осраған осраҡ. Ғаиләгә был осраҡта ни эшләргә?

Һаҡсыл режим булдырырға. Тәүге ярты йыллыҡта мәктәп үҙенән үҙе ауыр эш булып тора. Дәрестәрҙән һуң - ашау, тыныслыҡ, саф һауала йөрөү, уйындар. Алдан күҙаллана торған иртәлә ашыҡмай ғына йыйыныу зарур. Биш минутҡа өйҙән алда сығып, үҙ-ара һөйләшеп, мәктәпкә йәйәү барыу таймер тауышына ашығып әйбер эҙләүгә ҡарғанда күпкә яҡшыраҡ. Иртәнге ыҙғыштар баланың ресурстарын дәрес башланыуға тиклем үк "бөтөрә".

Дөрөҫ һорауҙар бирегеҙ. "Мәктәптә хәлдәр нисек?" - һорауын онотоғоҙ, ул аптырауға ҡалдыра. Аныҡ һорауҙар бирегеҙ: "Кем һине бөгөн көлдөрҙө?", "Ҡайһы дәрестә шым ғына ултырыуы айырыуса ауыр ине?", "Ә ниндәй дәрестә һин үҙеңде иң аҡыллыһы итеп тойҙоң?".

Уҡытыусы менән йылы бәйләнеш булдырығыҙ. Ата-әсәләр йыйылышын көтмәгеҙ. Дәрестәрҙән һуң бер-ике минутҡа тотҡарланып: "Беҙ уға иртәнсәк йыйыныуҙар ни хәтлем ауыр икәнен күрәбеҙ, үҙебеҙҙең яҡтан беҙ бының өҫтөндә эшләйбеҙ. Ул үҙен класта нисек тота? Беҙгә ярҙам кәрәк тип уйламайһығыҙмы?" - тигән һорауҙар бирегеҙ. Һеҙҙең процесҡа адекват рәүештә бирелгәнегеҙҙе күрһә, уҡытыусы һеҙҙең союздашығыҙ буласаҡ.

Уҡыу процесына аҡрынлап яраҡлашыу: ҡыҙыл флаг. Был осраҡта баланың мәктәпкә барырға теләмәүенә иғтибар итергә кәрәк, табибтар бер ниндәй сир тапмаһа ла, тап иртәнсәк эсе ауыртыуҙар, айырылышҡан саҡта паникаға бирелеү, аҙналар буйы үтмәй торған агрессия йә тулы апатия күҙәтеләсәк.

Эш итеү өсөн ҡулланма:

Тәүҙә педиатр. Бөтмәҫ ауыртыуҙар булған осраҡта ашҡаҙан, йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙарына тикшереүҙәр үтәбеҙ. Баланың организмы, ысынлап та, стресҡа ауыртыу менән реакция бирергә мөмкин.

Мәктәп психологы һәм уҡытыусы. Тәнәфес ваҡытында нимәләр була икәнлеге тураһында һөйләшегеҙ. Бәлки, эш килешмәгән урын, уҡытыусының көслө тауышы йә берәй класташы менән булған конфликтталыр.

Балалар психологы. Әгәр йәберләү, үҙүҙенә зыян килтереү билдәләре күҙәтелһә, йәшәргә теләмәүе хаҡында һүҙҙәр ишетелһә, йә йоҡо һәм ашау сифаты насарланыуы тураһында билдәле булһа, белгескә шунда уҡ, сирек бөткәнен көтөп тормайынса, мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Нимәләрҙе яҡшы динамика тип һанарға?

Ауырлыҡтар тирбәлә, әммә шулай ҙа кәмей икән, тимәк, аҡрын темпҡа ҡарамай, барыһы ла яҡшы бара. Мәҫәлән, сентябрҙә бала һәр иртә илаһа, октябрҙә был хәл дүшәмбе һайын ғына ҡабатланһа, ә ноябрҙә, кистәрен ныҡ арыуға ҡарамаҫтан, ул рюкзакка үҙе тотона. Әгәр уҡыусы режимға ҡарышмай ғына риза булһа, үҙен хәүефһеҙлектә тойһа, бер генә булһа ла дуҫы булһа һәм көндөң яҡшы моменттарына иғтибар итә алһа, яраҡлашыуҙың тамамланыуы хаҡында әйтергә мөмкин. Иң мөһиме, ата-әсәләргә аҡрын яраҡлашыу - ул холоҡ йомшаҡлығы һәм насар тәрбиә билдәһе түгел икәнен аңларға кәрәк. Был баланың нервылар системаһына әлеге ваҡытта ныҡлы терәк булған ҡосаҡлауҙарығыҙ, уҡытыусының яҡлауы һәм арыуға хоҡуҡлы булыу кәрәк, тигәнгә сигнал. Һеҙҙең эш - ноябргә унан отличник яһарға түгел, ә "минең менән барыһы ла яҡшы, мине мәктәп алдынан илаһам да яраталар" тигән тойғоно һаҡлап ҡалыу.

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

БАЛАҢ ИҒТИБАРЬЫҘМЫ?



Табип-педиатр, Республика балалар клиник дауаханаһының ҡабул итеү-диагностика бүлеге мөдире Гөлнара Ғәләүетдинова балаларҙағы иғтибар етешмәү һәм гиперәүҙемлек синдромының билдәләрен атаны.

Уның әйтеүенсә, был диагноз һәм уны дауаларға кәрәк. Иғтибар етешмәү һәм гиперактивлыҡ синдромы бала үҫешенең боҙолоуы тип һанала. Бындай диагноз булғанда балаларға иғтибар туплау ауыр. "Был меңәрләгән фәнни тикшеренеүҙәр менән раҫланған. Бала бының өсөн ғәйепле түгел, уның өсөн әрләү - ата-әсәнең иң ҙур хатаһы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлеге ваҡытта был синдром балалар араһында киң таралған, ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 5-8 процентында осрай", - тине педиатр.

Ғалимдар был диагноздың төп сәбәптәренә ген мутациялары, ваҡытынан алда тыуыу, гипоксия һәм бала тыуғанда йәрәхәт алыу, шулай уҡ дөрөҫ туҡланмау һәм витамин етешмәүҙе индерә. Һуңғылары үҙҙәре синдромды тыуҙырмай, әммә уның сағылышын көсәйтә ала.

Гөлнара Ғәләүетдинова әйтеүенсә, диагноздың тәүге билдәләрен 3 йәшкә тиклем күрергә мөмкин, әммә ул тулыһынса 5-10 йәштә сағыла. Уны дауалау комплексы ҡараш, табип, психолог, педагог һәм, иң мөһиме, ата-әсәләр менән бергә эшләүҙе талап итә. Әгәр балала гиперәүҙемлек синдромы булһа, уҡыуҙа өмөттәрегеҙҙе аҡламаясаҡ, сөнки ул яҡшы уҡый, дөрөҫ аралаша алмай. Артабан был уға уңышҡа өлгәшергә ҡамасаулай. Ул үҙе лә күп нәмәгә өлгәшә алмауынан яфалана. Иғтибар етешмәү синдромы менән сирләгән баланы тәрбиәләү еңел түгел, әммә был диагноздың хөкөм ҡарары түгеллеген оноторға ярамай. Был бары тик ауырыу ғына, уны дауалап була. Иң мөһиме, белгестәргә ваҡытында мөрәжәғәт итергә кәрәк.

ФАСТФУД ЗЫЯНЛЫ



17-се ҡала балалар клиник дауаханаһының амбулатор-поликлиника хеҙмәте буйынса баш табип урынбаҫары Татьяна Ханило фастфудтың балаларҙың уңышына кире йоғонтоһо хаҡында һөйләне.

Ул бер нисә физиологик сәбәпте билдәләне. "Фастфуд һәм тәм-томдар тиҙ углеводтарға һәм майға бай. Улар тиҙ арала, әммә бик ҡыҫҡа энергия бирә. Шуға бәйле ҡандағы глюкоза кимәле ҡырҡа түбәнәйә. Мәктәп уҡыусыһы өсөн был тиҙ арала һүлпәнлек, хәлһеҙлек һәм иғтибарҙың ҡырҡа кәмеүен аңлата. Бындай хәлдә яңы материалды үҙләштереү бик ауыр", - тип уртаҡлашты белгес.

Бындай азыҡты күп ҡулланыу бала өсөн матдәләр алмашыныуы һәм мейе эшмәкәрлегенең боҙолоуына килтерергә мөмкин. Атап әйткәндә, баш мейеһенә ҡан килеү насарая. Был хәтер, фекерләү тиҙлегенә һәм өйрәнеү һәләтенә кире йоғонто яһай. Һәм тағы бер фактор - нимереүгә, аҙ хәрәкәтлелеккә килтерә. Был иһә дөйөм эш һәләтен һәм физик әүҙемлеген кәметә, тип аңлатты Татьяна Ханило.

✓ *Билдәле тарихсы-этнограф Наил Бикбулатов, халҡыбыҙ уҙатамаһының килеп сығышын тикшереп, уның ҡырҡлаған варианты булыуын билдәләй һәм был үтә ҡыҙыҡлы проблеманың аҙаҡҡаса хәл ителмәүен күрһәтеп үтә.*

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

МИН ЯҘҒАНДЫ, ӘКИӘТ, ТИМӘ...

әкиәт төбөндә лә хәҡиҡәт бар



Тарихтың туҙға ғына түгел, телгә лә яҙылғаны

Этнонимдарға кире ҡайтып, башлаған фекеребеҙҙе дауам итәйек. Әйтәйек, ғәрәптәр үҙҙәрен нилектән ғәрәп тип атаған һуң? Бәҡһаң, был этнонимдың нигеҙендә "ар атаһы" тигән мәғәнә ята икән: "арий" һүҙе ер кешеһе мәғәнәһен бирһә, "аба" ғәрәпсәнән "атай" тип тәржемә ителә. Тимәк, Арабийа тип йөрөтөлгән ил "ар аталары иле" мәғәнәһен бирә лә инде. Бына нисек бит ул: бынан әллә нисә мең йылдар элек боронғо Урал ерлегендә башҡорт исеме аҫтында билдәле булған ҡәүемдәр (беҙҙең тарихи ата-бабаларыбыҙ) ғәрәп-арабийҙар менән дә туғандаш булып сыға түгелме һуң? Улай булмаһа, телебеҙҙәге "абый", "баба", "бабай" һүҙҙәренең, икенсе мәғәнәүи һыҙаттар алған хәлдә лә, төп ғәрәп һүҙе "аба" менән тамырҙашлығын инҡар итергә тура килер ине.

Этнонимдарҙы тикшереүҙең тарих фәненә бер файҙаһы ла юҡ, тиеүселәргә ҡаршы тағы бер тос ҡына дәлил килтерергә була. Ризаитдин Фәхретдинов тарихи яҙмаларында Волга-Урал төбәгендә йәшәгән халыҡтарҙың атамаларын барлап, "булғар" этнонимы тураһында ла үҙ фекерен белдереп китә. Билдәле тарихсы-этнограф Наил Бикбулатов, халҡыбыҙ уҙатамаһының килеп сығышын тикшереп, уның ҡырҡлаған варианты булыуын билдәләй һәм был үтә ҡыҙыҡлы проблеманың аҙаҡҡаса хәл ителмәүен күрһәтеп үтә. Тик шулай ҙа боронғо "башар" һүҙенең тәүге ер кешеһе мәғәнәһен аңлатыуын нигеҙле рәүештә иҫбатлап, "башар - башғар - башғард - башҡорт" лексик теҙмәһенең ысынбарлыҡҡа тура килеүен тел ҡанундарына ярашлы, тип табып, "башҡорт" этнонимының тарихи этимологик тәү тамырын юллау ҡайһы бер рәсми тарихсылар өсөн барыбер әкиәт кенә булып ҡаласаҡ.

Мин һөнәрем буйынса тарих белгесе түгел, тарихсылар менән бәхәс ҡороргә, уларға ниндәй ҙә булһа нигеҙһеҙ дәғүәләр белдерергә лә артыҡ теләгем юҡ. Тик шуныһы ла раҫ: бары үҙенә генә ғилем эйәһе, тип иҫәпләп, башҡаларҙың фекерен һанға һуҡмау беҙҙе хәҡиҡәткә һис яҡынайтмаҫ. Рәсәй тарихсылары араһында ла төрлө шау-шыулы, ығы-зығылы низағтар сығып торғанын күреп-белеп торабыҙ бит. Иң юғары власть әһелдәре талабы буйынса Ватан тарихы рәсми тарихсылар тарафынан ҡаттан-ҡат үҙгәртелә килеп, бәгзе бер осорҙарҙа танымаҫлыҡ итеп яңынан яҙылып, ысынбарлыҡтағы байтаҡ хәл-ваҡиғалар уйҙырмалар менән алыштырыла килеп, урыҫ дуҫтарыбыҙҙың беҙгә лә билдәле Тришка бишмәтенә әүерелдерелеп бөтөүенә ышанмай булмай.

Ер-ҡом аҫтында тарих һаҡланғаны

Миңә ҡалғанда, тарих - беҙгә ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған дөйөм мираҫ, уны тик профессиональ нигеҙҙә генә "хосусилаштырыу" тарихи фекерләү даирәһен үтә лә тарайтып, боронғо объектив ысынбарлыҡҡа яҡынлау юлдарын томалап ҡуйыр һымаҡ. Ошо фекергә дәлил булырҙай бер тарихи фактты иҫкә алып китеү яҙыҡ булмаҫтыр.

Тарих фәне, археология менән ҡыҙыҡһыныусылар араһында Генрих Шлиманн тигән затты белмәгәндәр һирәктер. Был кеше бала сағынан уҡ антик Грецияның бөйөк ижадсыһы Гомерҙың поэмаларын уҡып, унда тасуирланған тарихи хәл-ваҡиғаларҙың ысынбарлыҡта булыуына ысын күңелдән ышана башлай. Бигерәк тә уны Троя һуғышы тураһындағы мәғлүмәт әсир итә, һәм был ҡаланы эҙләп табыу Шлимандың ғүмерлек хыялына әйләнә. Нисек иҫең китмәһен, ти: Троя ҡалаһының ҡайҙа урынлашҡанлығын ул тап Гомер яҙғандарға таянып эҙләргә ҡарар итә. Ә Гомерҙың поэмаларын әкиәт, тимәй, бүтәнсә нисек атайһың инде? Шлимандың замандаштары, танылған Европа тарихсылары, билдәле археологтар уны Гомер әкиәттәренә һуҡырҙарса ышанған бер ҡатлы фанатик, тип ҡабул итеп, уның эҙләнеүҙәренән бот сабып көлә, һәм, әлбиттә, ул ойошторған экспедицияға ярҙам ҡулы һуҙыу тураһында һүҙ ҙә булмай. Тик тарихи дөрөҫлөк Шлиманн яғында була һәм күп тә үтмәй, ғәҙеллек тантана итә: тап ошо һәүәҫкәр тарихсы, антик донъя тарихына фанатиктарса бирелгән эҙәрмән-тикшеренеүсе, легендар Трояны күп быуаттар дауамында өҫтөнә өйөлгән ер-ҡом аҫтынан ҡаҙып сығара. Бына шулай, әкиәт әкиәт булһа ла, әкиәт төбөндә хәҡиҡәт ятыуы ла бар бит әле!

Милләт - ҡатмарлы һәм күп яҡлы йәмғиәт феномены, һәр милләттең үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ тарихы бар. Милләт тарихы проблемалары тарихи фәндәрҙән башҡа философия, антропология, генетика, медицина, психология, география, сәйәси иҡтисад, лингвистика кеүек фән йүнәлештәре өсөн дә тикшеренеү объекты була ала. Шуның өсөн теге йәки был халыҡтың килеп сығышын, тарихи үҫешен, милли үҙенсәлектәрен тулыраҡ өйрәнеү маҡсатында мөмкин булған барса сығанаҡтарҙы файҙаланыу һөҙөмтәле булыр ине.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.

(Аҙағы. Башы 35-се һанда).

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

КАРУАНһАРАЙҒА - 180 ЙЫЛ



Башҡорт халҡының яҙмышы менән айырылғыһыҙ бәйле булған үҙенсәлекле тарихи-архитектура комплексын, Ырымбурҙағы Каруанһарайҙы, "башҡорттарҙың изге урыны" тип йөрөтәләр. Фарсы теленән үҙләштерелгән һүҙ "каруандар йорто", "ҡунаҡ йорто" тигәнде аңлата.

- Комплекс 1838 йылдың йәйендә хәрби губернатор В.А. Перовскийҙың башланғысы менән күренекле архитектор А.П. Брюлловтың проекты буйынса төҙөлә башлай. Комплекс 1846 йылдың 30 августында (яңы стиль буйынса 11 сентябрҙә) асыла, төбәк һәм башҡорт йәмғиәте өсөн проекттың әһәмиәтен билдәләгән мөһим ваҡиғаға әүерелә, - тип һөйләнеләр Башҡортостандың Архив эштәре буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәтендә.

Бөгөн Каруанһарай әһәмиәтле мәҙәни мираҫ объекты ғына түгел, ә башҡорт халҡының тарихи юлының төп этаптарын күҙҙәләндергән милли һәм рухи мәккә булып ҡала. Уның исеме мәҙәниәттә йәшәй: "Каруанһарай" фольклор-эстрада төркөмө бар, ул гәзит-журналдарҙа мәҡәләләләр исемдәрендә осрай, музыкаль һәм хореографик әҫәрҙәр авторҙарын илһамландыра.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

БАШҠОРТТАР


Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Ирҙәрҙең билбауҙары төрлө һәм улар, нигеҙҙә, өс төргә бүленә: *билбау, ҡаптырға* һәм *ҡәмәр*. Башҡорттар кейем өҫтөнән быуып йөрөгән билбауҙар ике төрлө. Иң киң таралғаны оҙонлоғо өс метр булған туҡыма (ҡомас, ситса, коленкор, бумазый). Туҡыманы өс-дүрт ҡат бөкләп, уны билгә ике тапҡыр урайҙар һәм остарын ҡыҫтырып тығып ҡуялар. Бик һирәк йөндән туҡылған билбау ҙа осрай. Уны башҡорттар үҙҙәре XIX быуатта уҡ эшләй һәм ул киң тарала. XX быуат башында ул таулы ерҙәрҙә һәм Урал аръяғы далаларында ғына осрай, башҡа урындарҙа бик һирәк була. Был билбау ҙа бик оҙон (3,5 метрға етә), әммә тар (киңлеге 15 сантиметр) була. Уны ҡара төҫтәге ептәрҙән туҡыйҙар, осона суҡ ҡуялар.

Ҡаптырға - тар (киңлеге 2-3 сантиметр) ҡайыш билбау, оҙонлоғо сағыштырмаса ҡыҫҡа (1,2 - 1,3 метр). Уның тышҡы яғына биҙәк баҫылған, бер башында ҡармаҡ кеүек таралғы, икенсе башында тишектәр була. Ҡайыштың уң яҡ ҡабырғаһына ҙур дүрткел *күн ҡаптырға* йәки *ҡалта* эленә **(һүрәт)**. Ә һул ҡабырғаһына ағастан яһалып, күн менән тышланған ҡындарҙа бысаҡ һәм ҡайыш һауытта ҡайраҡ эленә. Ҡайһы берҙә ҡайышҡа тыш яҡтан көмөшкә сүкеп биҙәк төшөрөлгән тимер айылдар ҡуйыла. Ҡаптырға һәр саҡ биҙәк баҫылған күн ҡапҡаслы, биҙәктең аҫҡы өлөштәре баҡыр купоросы менән уйҙырылып эшләтелә. Сумкала саҡматаш, ҡау һәм башҡа ваҡ әйберҙәр йөрөткәндәр. XX быуат башында ҡаптырғаның таралыу районы бик сикле була.



Ҡаптырғала ғына түгел, башҡа билбауҙарҙа ла башҡорттар һәр саҡ ҡында бысаҡ йөрөткән. Башҡорт бысаҡтарының бер үҙенсәлеге лә юҡ. Ә бына бысаҡ ҡындары төрлө һәм ҡыҙыҡлы. Иң киң таралғаны ике ағасты күн менән уратып эшләнгән ҡын **(һүрәт)**. Ҡайһы берҙә, һүрәттән күренеүенсә, улар баҡыр киҫәге менән көпләнгән һәм осонда тимер суҡтар менән биҙәлгән.



Ҡындың башҡа типтары бик һирәк осрай һәм улар ошо урынға ғына хас. Улар йә ағастан яһалып, ат тирехе менән тышлана **(һүрәт)**, йәиһә йүкәнән эшләнеп, туҙ киҫәктәре менән тышланған, үрелгән ҡындар ҙа осрай; ҡындар шулай уҡ туҙҙан да эшләнгән.

Бай башҡорттарҙа ҡасандыр ҡәмәр йәки ҡәмәр билбау модала булған. Улар ҡиммәтле еҙ гравировка менән биҙәлгән, ҡаптырмалары көмөштән, ҡаштары аҡыҡ, фирүзә кеүек таштар менән биҙәлгән **(һүрәт)**. Бик йыш бындай ҡушаҡтар тотошлайы менән сүкеп биҙәк яһалған һәм ҡаштары аҡыҡ, фирүзә менән биҙәлгән көмөш пластиналарҙан торған. **(һүрәт)**. Борон бындай ҡушаҡтар бик ҡиммәт баһаланған: шундай бер ҡәмәр өсөн байҙар яҡшы арғымаҡ йәки ике үгеҙ биргән.



(Дауамы бар).

ТЕЛЕҢДӘН

"Ҙур рәхмәт, рәхәтләнеп, йылмая-йылмая уҡыным. Шул тиклем халыҡсан тел, яғымлы юмор менән яҙылған. Үҙем өсөн күптән ҡулланылыштан сыҡҡан, йә урындағы һөйләштә, ололар телендә генә һаҡланып ҡалған әллә күпме һүҙҙәр астым. Хикәйәне уҡығанда үҙемдең балалығым үткән ауылымды, күптән инде баҡыйлыҡҡа күскән инәй- бабайҙарҙы (йәндәре йәннәттә булһын) иҫкә төшөрҙөм. Тағы ла бер тапҡыр ҙур рәхмәт, һаулыҡ, ижади уңыштар һеҙгә..." тип, "Бәйләнештә" селтәрендә Вәзилә Хәкимова күренекле яҙыусы Хәйҙәр Тапаковтың "Туғандар һәм таныштар" хикәйәһенә ҡарата үҙ мөнәсәбәтен белдергән.

Әйткәндәй, Хәйҙәр Тапаковтың "Йәшлеккә ҡайтыу" проза йыйынтығының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителеүен китап һөйөүселәр ҙур ҡәнәғәтлек менән ҡаршы алды.

Әҙипте иң нығ борсоғаны…

Ваҡыт аяуһыҙ хөкөмдар. Кешеләрҙе, хатта ҡәүемдәрҙе, уларҙың башҡарған ғәмәлдәрен, ваҡиғаларҙы, күренештәрҙе, йылдарҙы, хатта быуаттарҙы үҙенең иләге аша үткәреп, он-талҡандай итеп ваҡлап, турап, онтап, киләсәккә иң лайыҡлы ғына тип иҫәпләгәндәрен сығара. Киләсәккә ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, юғарыла ултырған "йөнтәҫ ҡуллы ағай" ярҙамында, ришүәт түләп ҡаҙанған юғары исемдәреңә таянып, фанилыҡта ҡайһы бер ишектәрҙән үткән һымаҡ, шөһрәт шәһәҙәтнамәләреңде күрһәтеп кенә үтеп булмай торғандыр.

Был йәһәттән ваҡыт ғәм халыҡтың күҙе-ҡашы алдында булған батшаларға, хакимдарға, күренекле-күрмәлекле заттарға, сәнғәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт әһелдәренә аяуһыҙҙыр тим. Батшаларҙың, хакимдарҙың, мәҫәлән, киләсәккә үтер әмәле икәү генә: уларҙы халыҡ киләсәккә күтәреп йә тапап үтә.

Мәшһүр Пушкиндың замандашы, улай ғына ла түгел, XIX быуатта әҙәбиәт шөһрәт, дан, әҫәрҙәренең тиражы йәһәтенән Пушкиндан күпкә юғары һаналған рус яҙыусыһы, әҙәби тәнҡитсеһе, журналисы Фаддей Булгариндың (1789-1859) бер әҫәре генә түгел, хатта исеме лә киләсәккә үтә алмаған. Быға Булгариндың заманында "Төньяҡ бал ҡорто" гәзите лә, "Төньяҡ архив" журналы ла ярҙам итә алмаған. Үҙ заманында уның китаптары Рәсәйҙә генә түгел, донъяла иң күп дана менән сыҡҡандарҙан һаналған. Ул Пушкин менән ваҡытлы матбуғат аша туҡтауһыҙ полемика ҡорған, бәхәсләшеп йәшәгән. Ә Ваҡыт ғәли йәнәптәре уны билдәһеҙ иткән, ә Пушкинды бар донъя белә, шиғырҙарын ятҡа һөйләй...

Ваҡыт-хөкөмдарҙың яҙыусыларға, шағирҙарға, рәссамдарға, композиторҙарға, башҡа ижад әһелдәренә сығарған хөкөмө үҙенсәлекле. Йылдар үткән һайын ижадсыларҙың күңел емештәре, әҫәрҙәре иләктән төшөп ҡала бара, һуңғы сиратта бер генә әҫәре йәки сифаты тороп ҡала. Был йәһәттән Әсхәл Әхмәт-Хужаның Рәшит Назаров тураһында әйткән һүҙҙәре ҡыҙыҡлы: "Мәгәр мин шуға ысынлап инанам: Рәшит Назаров үҙенең йәшен кеүек яҡты ғүмерендә үрҙә миҫалға килтерелгән ике генә мөғжизәүи шиғырҙы - ни бары "Йәшен" менән "Йөрәк" әҫәрен - ижад иткәндә лә, әҙәбиәт тарихында барыбер даһи тип нарыҡланыр ине". Хәйҙәр Тапаковтың яҙмаларында ла шуға ауаздаш юлдар бар: "Әгәр Александр Сергеевич Пушкин бер "Евгений Онегин"ды ғына яҙып ҡалдырһа ла рус әҙәбиәтендә юғары урындарҙың береһен биләр ине, моғайын..."

Әгәрҙә әҙиптәрҙең тик бер сифатын күҙ уңында тотҡанда, киләсәк:



Йылдар үткән һайын ижадсыларҙың күңел емештәре, әҫәрҙәре иләктән төшөп ҡала бара, һуңғы сиратта бер генә әҫәре йәки сифаты тороп ҡала. Был йәһәттән Әсхәл Әхмәт-Хужаның Рәшит Назаров тураһында әйткән һүҙҙәре ҡыҙыҡлы: "Мәгәр мин шуға ысынлап инанам: Рәшит Назаров үҙенең йәшен кеүек яҡты ғүмерендә үрҙә миҫалға килтерелгән ике генә мөғжизәүи шиғырҙы - ни бары "Йәшен" менән "Йөрәк" әҫәрен - ижад иткәндә лә, әҙәбиәт тарихында барыбер даһи тип нарыҡланыр ине".

- Пушкинды, үҙе үк әйткәнсә, "парадокстың дуҫы" булғаны;

- Лев Толстойҙы - үҙе йәшәгән йәмғиәт ҡанундарын инҡар иткәне;

- Федор Достоевскийҙы - шәхес тарҡалыуын барлыҡ ҡатмарлығында күрһәтә алғаны;

- Салауат батырыбыҙҙы - яугирлыҡ менән шағирлыҡты бергә ҡуша алғаны;

- Аҡмулланы - үҙ халҡын уҡырға өндәп өндәшкәне;

- Бабичты - халҡы өсөн миллион тапҡыр үлергә әҙер булғаны;

-Яныбай Хамматовты, Сабит Фазлыевты - роман менән әҙәбиәткә килгәндәре;

-Рәмиҙе - халҡының сәскә күңеленән бал ҡортондай ынйы йыйғаны;

-Мостайҙы - гуманлылыҡ принциптарына тоғро ҡалғаны;

-Рауил Бикбаевты - халҡына хаттар яҙғаны, илендә илен һағынғаны;

- Сыңғыҙ Айтматовты - ҡырғыҙ характерының, ҡырғыҙ психологияһының донъя халыҡтары характерының, психологияһының айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп күрһәтә алғаны;

- Ноғман Мусинды - кешеләр күңелендә урманға, тәбиғәткә ҡарата һөйөү, әҙәби ижадҡа ҡарата романтик тойғо тәрбиәләгәне;

- Рәшит Солтангәрәевты - башҡорт характерын һынландырғаны;

- Таңсулпан Ғарипованы - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының рухи хәләтен сағылдырғаны;

- Әмир Әминевты - Ҡытайҙың донъя державаһына әүерелерен алдан күргәне;

- Тамара Ғәниеваны - күңел сөңгөлдәренең сөңгөлдәрендә ятҡан ҡуҙҙарҙы баҙлатҡаны;

- Рәйес Түләкте - кешелекте янғындан иҫкәртер өсөн үҙе утта янғаны;

- Буранбай Иҫҡужинды - үҙүҙенә юмор күҙлеге аша ҡарай алғаны өсөн иҫкә алыр.

Һәр ижадсының үҙенә генә хас сифатынан сығып, был исемлекте тағы ла дауам итергә булыр ине. Шулай ҙа яҙыусы, прозаик Хәйҙәр Тапаковҡа арналған мәҡәләлә ниңә шулай ҙурҙан ҡуба тиһегеҙме? "Әлеге ваҡытта тормошта һеҙҙе иң борсоғаны нимә?" тигән һорауға Хәйҙәр ағай шулай яуаплағайны: ***"Эскелек. Тотош йәмғиәтебеҙҙе солғап алған эскелек. Уны бөтөрөү, айныҡ тормошҡа ҡайтыуы еңелдән булмаясаҡ. Эскелек менән революцияға ҡәҙәр ҙә батшалар көрәшеп ҡараған. Ленин да эскелекте бөтөрөргә маташҡан. Ҡиммәтле сортлы виноградтарҙы тамырынан ҡырҡып ырғытып, кибеттәрҙә шәкәр һатыуҙы тыйған Горбачев хаҡында әйтеп тораһы ла түгел... Араҡынан ҡотолоуҙың берҙән-бер юлы - халыҡты бөтөү. Белеме булған кеше араҡыға ынтыла һалып бармай бит, ни тиһәң дә, ул аҡлы, мәҙәниәткә, әҙәбиәткә, тәртипкә яҡын кеше..." (Зөһрә Ҡотлогилдина "Яҡындарым янда, донъям теүәл саҡта ғына кәйеф күтәрелгәндә ижад итә алам", "Ағизел" 2019, №8)***

Тап шуның өсөн дә яҙыусының үҙ әҫәрҙәрендә сағылыш тапҡан үҙәк проблемаларҙың береһе - эскелек һәм уға бәйле рухи бөлгөнлөк, деградация. Әммә эскелек, шөкөр, яңы быуат башында халҡыбыҙҙың фажиғәһе булыуҙан күпкә алыҫлашты. Әлбиттә, был сир менән яфаланыусылар бар, әммә ул милли сир түгел, үткән быуаттың аҙағынан алып бөгөнгәсә ауыҙына тамсы ла алмаған тиҫтәләгән быуын вәкилдәре үҫеп сыҡҡан икән, киләсәгебеҙ был йәһәттән яҡты булыр. Бирһен Хоҙай, киләсәктә халҡыбыҙ бынан быуат ярым элекке ваҡыттағыса, эскелектең нимә икәнлеген дә онотор, эскеселәр динозаврҙар сүрәтендә ҡалыр.

Теле телеп һала…

Миңә ҡалһа, фекеремде башҡалар ҙа уртаҡлашыр, яҙыусы Хәйҙәр Тапаковты киләһе быуындар бер әҙиптекенә лә оҡшамаған халыҡсан, һутлы, һаҡмар йылғаһының урта ағымына хас лөғәте, яҙыу стиле булған өсөн иҫкә алыр, әҫәрҙәрен үҙ итер. Улай ғына ла түгел, уның әҫәрҙәре тап ошо юҫыҡта махсус өйрәнеүсе ғалимын табыр, мәктәп-гимназиялар махсус урта, юғары уҡыу йорттары дәреслектәренә уның әҫәрҙәре өйрәнелер. Хәйҙәр ағай уҡыған Өфө фән һәм технологиялар (элекке Башҡорт дәүләт) университеты филиалы Стәрлетамаҡ педагогия институтында был йәһәттән боҙ ҡуҙғалған да инде - студенттар диплом эшен яҙыусының тел үҙенсәлектәренә бағышлай. Яҙыусының тел-стиль үҙенсәлектәрен, лексика ҡатламын билдәләр өсөн әҫәрҙәренең айырым һүҙҙәре, һүҙбәйләнештәре, һөйләмдәре, абзацтары картотекаларға индерелер, Интернет аша башҡорт телен өйрәнеүселәрҙең телмәрен байытыу маҡсатында ҡулланылыр, республиканың, баш ҡалабыҙ Өфөнөң башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының махсус курстары ойоштороллор.

Эйе, тел тигәндә, телеп һала Хәйҙәр ағай Тапаков. Уларҙы уҡығанда бер кемдекен дә түгел, Йылайыр районының Һабыр ауылында тыуып үҫкән әҙиптең үҙ тауышын ишетәһең. Тамырһыҙ ағас, үлән булмағандай, тамырһыҙ, ерлекһеҙ яҙыусы ла булмайҙыр ул. Был үҙе үк яҙыусының үҙ стиле, әҙәбиәттә үҙ тауышы барлығын бермә-бер раҫлап тора.

Мин, әле булһын, радиобыҙҙың алтын фондында һаҡланған яҙмалар араһынан күренекле яҙыусыбыҙ Шакир Янбаевтың үҙе уҡыуындағы хикәйәләрен тыңлап, оло кинәнес кисереп йәшәйем. Хәйҙәр ағайҙың үҙе уҡыуында ла хикәйәләрен бик тыңлағым килә. Әлбиттә, үҙенсәлекле тауышлы актерҙар уҡыуында ла уның әҫәрҙәре яңғырарға тейеш, барыбер ҙә авторҙың үҙе уҡыуындағына бер нәмә лә етмәйҙер тип уйлайым.

Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта. Юғарыла атап үтелгән тәҡ-

ҺӨЙӨН, АҒАЙ!

димдәремде нығытыр өсөн яҙыусының әҫәрҙәренән бер нисә өҙөк тәҡдим итәм:

"Туп" - "Хәтерҙәге хәтирәләр" циклынан

"Салт аяҙ күк йөҙөләй зәпзәңгәр күҙле, һылыу, шаян холоҡло Хәмдиә апай уйламағанда-көтмәгәндә йәшләй генә үлеп киткән Раҡыя апайымдың ире Нурфәйез еҙнәгә кейәүгә сығып аптыратты. Шыпа ла ғына аңламаҫһың, мәңге төшөнмәҫһең был ҡырҡ сыраҡлы ҡатын-ҡыҙҙың сәйер теләк-ынтылышын, һыуһыҙ ҡалаҡҡа налып йоторлоҡ һөйкөмлө һөйәк була тороп та, ауылдың ажар, фартауай егеттәрен күҙгә лә элмәй, Ҡарасман ҡушаматын йөрөткән, уң яҡ аяғына һылтыҡлап атлаған, күрмәлеге ауылдан сыҡҡансы ғына етерлек тол ирҙе һайлаһынсәле! Улай тиһәң, еҙнәм үтә лә кешелекле, эшлекле, тиңдәшһеҙ балта оҫтаһы, өҫтәүенә, гармунда шәп уйнай, ҡулында ҡыңғыраулы тальянын былбылдай һайрата ғына, етеҙ бармаҡтарын көмөш телдәр өҫтөндә күҙ эйәртмәй йүгертеп, бейетеп ебәрһә, күкрәк ситлегенә һыймаған йөрәк һабан турғайылай ыңғайы бер асманға сойорғой, хискә, сикһеҙ хыялға сорналған илаһи йән моңға иҫерә. Икмәк өҫтө, шаштырмайым, ундай гармунсыны көндөҙ шәм яндырып эҙләһәң дә таба алмаҫһың. Оҫта гармунсының ҡәҙерен беләләр беҙҙең яҡта, уның урыны түрҙә, һыйлы ерҙә, туймәжлестәрҙең уртаһында, әммә Нурфәйез еҙнә икенсегә өйләнгәс, ҡунаҡ-мәжлестәргә йөрөүен дә, ауыҙына хәмер алыуын да ҡырҡа онотто, туҡтатты. Шулай булмай тағы, апайым мәрхүм булғандан һуң ҡойтоланып, ҡотһоҙланып киткән донъаһы бөтәйҙе ләһә, уға матурлыҡ, ҡот ҡунды.

Һүҙгә әүрәп, әйтеремде онотоп барамсы, шул сибәрҙәрҙән-сибәр Хәмдиә, яҡын, ҡәрҙәш апай хөкөмөндә ҡалғанлығын тойопмолор, бер көн миңә күк юлаҡлы, тамылйып бешкән алмалай, тауҙар артынан тәгәрәп килеп сығып, офоҡто алландырған шәфәҡтәй, ҙурлығы ҡуш йоҙроҡтан ары китмәгән йомро туп бүләк итте. Ирәмһегән күңеле майҙай иреһен өсөн итек башындай балаға күпме генә кәрәк тиһең, ҡыуаныуымдың сиге булманы..."

"Аҡ фәрештә" хикәйәһенән өҙөк:

"Мине яҡты донъяға өләсәйем ҡабул итеп алған. Тирә-яҡҡа даны таралған кендек әбейе, өшкөрөү-төкөрөүе, имтомо сихәтленең сихәтлеһе, ҡулдары һылау-һыйпауға ифрат ятып, килешеп барған, торғаны бер ҡабатланмаҫ тылсым эйәһе ине ул. Шуғалыр ҙа, ҙурлығы яғынан ҡара мунсанан ары китмәгән, һалам ҡыйыҡлы, береһе ишек алдына, икенсеһе урам яҡҡа ҡараған бәләкәй тәҙрәле өйөбеҙгә гелән эркелеп, кемуҙарҙан килер булдылар, һайғау кәртәле ишек алдының шаҡарма ҡапҡаһы ауыҙынан егеүле, арбалы, йә саналы аттар һис ҡасан өҙөлмәне. Төн уртаһында ла, таң һыҙылғанда ла, аяҙҙа ла, көн боҙолоп буранлап торғанда ла, ҡойоп ямғыр яуғанда ла буҫағаға саң ҡундырмай, өҙлөкһеҙ ағылдылар беҙгә, ә өләсәйем инде, үҙ сиратында, уларҙы көтөп кенә йөрөгәндәй, тиҙ арала йыйынып-кейенеп, усына йомшаҡ беләүгә оҡшаш им-том ташын йома ла, тотҡарлыҡһыҙ-ниһеҙ саҡырған тарафҡа юллана, ай күрҙе, ҡояш алды, тигәндәй, аҙна-ун көнгә зым-зыя юҡҡа сыға. Күрше-тирә ауылдарҙа ҡуна ятып ауырыуҙарҙы, зарынтизарҙарҙы дауалап шулайтып ылғый юғалып торһа ла алыҫҡа, өҙәрем яҡтарға сығып йөрөгән зат түгел ине ул, һыуға ырғытылған таштай тыуған еренә мөкиббән китеп батҡан, һеңгән ауыл кешеһе ине. Хәҙер ишетер ҡолаҡҡа ят яңғыраған Ҡыҙбикә исемле өләсәйем сит-яттарҙы үҙенә арбарлыҡ, йәлеп итерлек һөйкөмлө, мөләйем йөҙлө, тәбәнәк буйлы, еңел һөйәкле, ҡаҡса кәүҙәле булды, шуға күрә көслө ел сығып, дәһшәтле дауыл ҡубып уны йәнәһе лә ер сигендә ҡалҡҡан, күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән Ҡаф тауы артына осороп алып китә генә күрмәһен, тип мин йыш хафалана, борсола инем...

баш була алмай йоҡлап ҡала ла, һыйырҙарын һаумайынса ауыл осона сығып өлгөргән көтөүҙе баҫтырта. Тегеләренең елендәре таржайышып, ярылыр сиккә етеп бәүелеп, һөттәре тамсылып бара. Үҙенең йоҡлай барып күҙҙәре шешенеп бөткән, таралмаған сәстәре туҙыраған, өҫтөндә төймәләре аша-төшә эленгән ҡыҫҡа халат, халат йоратынан бар ҡатын-ҡыҙ ниғмәттәре күренә. Яр буйһе тип ҡотоң осор, билләһи, ыстырам!.."

Бергә сәй эскәндәй, мунса ингәндәй...

Сибайҙа Хәйҙәр ағайҙың өйөндә ҡунаҡ булырға, Вәсилә еңгәнең тәмле аштарын ауыҙ итергә, сәйен эсергә насип булды. Шундағы ирәүәнлек, күңелдәге рәхәтлек, гүйә, беҙ ағайҙың өйөндә генә ҡунаҡта ултырмайбыҙ, ә бер хикәйәһенең, повесының персонаждары, шул әҫәренең тулы ҡанлы геройы булып сәй һемерәбеҙ, көңгөр-ҡаңғыр һөйләшәбеҙ, ниндәйҙер проблемаларҙы хәл итәбеҙ, шул уҡ ваҡытта артабанғы яҙмышыбыҙ йорт хужаһының, әҫәр авторының ҡулында. Хәҙер беҙҙе нишләтер икән автор-хужа тип көтөп ултырған булабыҙ инде, нишләйһең - ҡунаҡ хужаның ишәге!

Бындай ирәүәнлек ҡайҙан килә тиһегеҙме? Әлбиттә, ағай яҙған хикәйәләрҙең беҙгә тәьҫиренән, яҙыусының оҫталығынан. Үҙем шәхсән күренекле яҙыусыбыҙ Булат Рафиҡов менән аралашҡанда шундай тойғолар кисерә торғайным. Уның менән осрашып, берәр Инеп ултырып ҡабаланмай ғына көнитмеште теүәлләп хәл-әхүәл белешкәндән аҙаҡ Сәйфетдин олатай, үҙе әйтмешләй, күңелле йыр нуҙыусы табын йәмен алып инергә тип сығыу яғына ҡарай йүнәлә. Артынан ҡуштан тауыҡтай, мул итәктәрен елпеп, Мәстүрә инәй эйәрә төшә. Үҙе ыңғайы бер хәстәрләп ҡайғыртып ҡарты тирәһендә әйләнгеләгән, бөтөрөнгән була: "Бабай, иплəп, абайлап, ормаһарҙан биленде биртендермә тағы, тупһаны йәтешләп ашатла, абынып китә күрмә!" Ярҙам итергә, булышырға теләгәндәй өтәләнеп барып, ҡыу бармаҡтары менән семтеп самауыр ҡолағына йәбешкән була, шулайтып үҙенсә еңеләйтә инде ауырлыҡты. Бына, ниһайәт, һуғылған балаҫ йәйелгән иркен урындыҡҡа аҡ киндер ашаулыҡ йәйелә, еҙ батмус өҫтөнә әлеге самауыр килеп ҡунаҡлай, бисмиллалап ҡабарып бешкән өй икмәге теленә, табын тултырып ризыҡ ҡуйыла. Бындағы һәр нәмә, шул иҫәптән маҡбаллы һандыҡ өҫтөнә ябылған сағыу ҡорама, яҫтыҡтар өҫтөндәге, тәҙрәләр ҡорғанындағы селтәрҙәр, минең өсөн генә ҡуйылған, алдымдағы һыйҙан һығылған табын фәҡәт миңә, яңғыҙ үҙемә генә тәғәйенләп әҙерләнгән һымаҡ. Хөрмәт йөҙөнән, әллә инде ниндәйҙер бер эске яҡынлыҡты тойған олатай менән инәй сиратлап арҡамдан ҡағалар, ҡулымдың һыртын һөйөп-һөйөп алалар. Ә мин инде кинәнестән, ғәзиз балаға ғына күрһәтелә торған иғтибарҙан йырылған ауыҙымды йыйып ала алмай рәхәтләнәм..."

"Миҙал" повесынан өҙөк:

"...Уның ни ҡойолдороҡ икәнлеге атлап йөрөшөнән билдәле, килен икән - өҙә баҫып бейеп торһон, ҡулынан да, теленән дә килһен. Был ялҡау түшәктәге ире ҡосағында маҙырап йоҡлауҙан башҡаға эшкинмәй. Туптырҙатып бала табыуҙамы ни йәм, уларҙы әҙәмсә итеп бағып үҫтермәгәс. Ире лә йонсоу, ҡарауһыҙ, балаларының да өҫ-баштары ҡатып бөткән, тамаҡтарына ла йүнләп бешермәйҙер әле, эш мәнеһен, хәстәр рәтен белмәгән һәпрә. Йоҡоһона тарихи романына бәйле әңгәмә ҡора башлаһаҡ, шул әҫәренең геройына әүерелгәнемде тоя инем.

Яҙыусының "Сәй" хикәйәһен уҡығандан һуң йортона барып, сәйен эскәндә тағы ла ниндәйерәк тойғолар кисерергә мөмкиндер:

"...Ҡарттарҙың хәлен белергә, йәнә сәйҙәрен эсергә яратты. Сәй эсеүе - ни эсеүе, тиһәләр ҙә табын изге йола, күркәм сара, матур бер күренеш дәрәжәһенә күтәрелгән ине уларҙа. Ҡасан ғына барһаң да күтәрмәлә һине генә көткәндәй ҙур эсле ялтыр самауыр йылымыс аҡ быуын борхота.

Был юлдарҙы уҡығанда һеҙ ҙә сәй эскәндәй булдығыҙмы, дуҫтар! Ҡайҙан килә тиһегеҙме бындай ирәүәнлек? Әлбиттә, яҙыусының оҫталығынан, уҡыусыны инандырыу маһирлығынан, атап әйткәндә, тел ҡөҙрәтенән. Сәй эсеү генә тиһеңме, яҙыусы менән бергә тоҙло перәниктәр ашайһың, мунса инеүҙе тасуирлаған хикәйәләрендә автор менән эләүкәлә сабынғандай булаһың, тальян гармунында тыҫҡылдатаһың һ.б.

Ҡыҫҡалыҡта - оҫталыҡ, "Ҡыҫҡалыҡ - таланттың апаһы" тигән Антон Чехов. Һуңғы йылдарҙа интернет, атап әйткәндә, "Бәйләнештә" селтәре беҙгә, яҙармандарға, итәк-сабыуҙарыбыҙҙы йыйнабыраҡ тоторға, оҙон тәләккә төшөп китмәйенсә, ҡыҫҡараҡ яҙырға өйрәтә. Был йәһәттән Хәйҙәр Тапаҡовтың "Бәйләнештә"ге "Хәтерҙәге хәтирәләр" циклында баҫылған яҙмалары үҙенсәлекле әҙәби жанрҙы хасил иткән, улар тормошта булған ваҡиғаларға нигеҙләнә, шул уҡ ваҡытта әҙәби әҫәр, хикәйә һымаҡ та ҡабул ителә. Ҡыҫҡалыҡ яҙыусынан түбәндәге шарттарҙы талап итәлер:

- үҙ-үҙеңде аяуһыҙ рәүештә мөхәррирләүҙе;

- романдарға, повестарға торошло ваҡиғаларҙы, күренештәрҙе, фекерҙәреңде йәлләмәйенсә, бер абзацта әйтеп биреүеңде;

- бер нисә сюжетты, ваҡиғаны күҙ уңынан үткәреп, уларҙың араһынан иң мөһимен билдәләп, дөйөмләштереү һәләтен;

- тормош тәжрибәһен, фекеренде ҡыҫҡа итеп кинәйә, образ аша уҡыусыға еткереү оҫталығын һ.б.

Күренекле яҙыусы, тел маһиры Хәйҙәр ағай Тапаҡов ижади тормошонон шундай мәленә, икенсерәк итеп әйткәндә, мәҡәлдәр, әйтемдәр ижад итеү йәшенә еткән. Әммә, кәрәкле саҡта, ниндәйҙер аҙым яһар алдынан ул миңә, ҡустыһына шылтыратып: "Бына шундай хәл, нимә эшләйем икән?" - тип кәңәш тә һорағаны бар. Был да уның ололоҡло-кеселекле сифатына ишара, икенсенән, ул үҙенән кәсе кешенән кәңәш һорап, ул кешегә лә ихтирамын һәм иғтибарын белдерә. Ундай ағайҙарым минең өсөү: Тимер Ниәтшин, Самат Фәйзуллин һәм Хәйҙәр ағай.

Күренекле яҙыусы, тел маһиры Хәйҙәр ағай Тапаҡов ижади тормошонон шундай мәленә, икенсерәк итеп әйткәндә, мәҡәлдәр, әйтемдәр ижад итеү йәшенә еткән. Әммә, кәрәкле саҡта, ниндәйҙер аҙым яһар алдынан ул миңә, ҡустыһына шылтыратып: "Бына шундай хәл, нимә эшләйем икән?" - тип кәңәш тә һорағаны бар. Был да уның ололоҡло-кеселекле сифатына ишара, икенсенән, ул үҙенән кәсе кешенән кәңәш һорап, ул кешегә лә ихтирамын һәм иғтибарын белдерә.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Яҙыусының ҡыҫҡа яҙмалары араһында "Эҙҙәр" тигәне үтә лә фәһемле. Әҙип-уҡытыусы ауылда буран сыҡҡанда иртә тороп тәрән көрттә эҙ һалып, мәктәпкә ҡарай атлай. Шуны ғына көткәндәй, уҡыусылары өйҙәренән сығып, уның һалған эҙҙәренә баҫып артынан эйәрә. Яҙма шулай тамамлана: "Хәҙер ниндәй генә эшкә тотонһам да, ҡайҙа ғына барһам да, эшемде еренә еткереп эшләргә, һәр аҙымымды самалап, үлсәп баҫырға тырышам. Артыма боролоп ҡараһам, уҡыусыларым минең эҙҙәремә генә баҫып киләләр һымаҡ тойола".

Ә бит шул уҡ эҙҙәрҙә туған телебеҙ яҙмышы ла ята. Бигерәк тә бөгөн, сабыйҙарҙың теле башҡаса асылғанда, ауылдар юҡҡа сыға барғанда, уҡыусылар уҡытыусыһының эҙҙәренә баҫып барған һымаҡ, уларҙың телдәре лә яҙыусының, шағирҙың теленә эйәреп асылғанда ғына киләсәгебеҙҙең яҡты булырына өмөт бар.

Телендән һөйөн, Хәйҙәр ағай, ижадсы булараҡ һинең тәғәйенләнешең дә туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыуҙа!

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

✓ Тимәк, ул йыл буйына Нәркәстең алдаҡ хаттарына ышанып, шуға ҡыуанып, яуапҡа оҙон-оҙаҡ мөхәббәт хаттары яҙып, ҡыҫҡаһы, тулайым бер иҫәр булып йөрөгән Афғанда!

Нәркәс юҡта өйләнешеү хаҡында хәбәр ҡуҙғатҡыһы килмәне егеттең. Оҙаҡлап та ултырманы, сәй эскәс тә ҡуҙғалып, автобусҡа китте. "Ҡайны" кеше оҙатырға сыҡты. Артынса "ҡәйнәһенең" шыбырҙап ҡына: "Бер ни белмәй шикелле ул, белмәһә әйт!" - тигәне ҡолағына салынып ҡалды. Тик хужа кеше туҡталышта күҙҙәрен ситкә алып ниңәлер ыҡ-мыҡ килде, кәрәкмәгән хәбәр сурытты, егет автобусҡа күтәрелә башлағас ҡына, кинәт һиҫкәнеп, "кейәү" тине лә, яңылыш хәбәр әйткәндәй тотлоҡто һәм, ниҙер юғалтып сикһеҙ үкенгән ҡиәфәттә ҡул изәне...

"Улар Өфөлә" тине Нәркәстең әсәһе. Ана шунда уҡ аңларға булған да бит хәлдәрҙе, эх-х... Ә атай кеше үтә йомшаҡ холоҡло, күңелсәк күренә шул. Әйтергә ҡыйыулығы етмәне шуға...

Йә Хоҙай, ниндәй хурлыҡ?! Йөрө әле шулайтып, иҫәр кеше һымаҡ, тьфу... Икенсе яҡтан, эс ҡатҡансы хаҳылдарлыҡ күренеш таһа ситтән ҡарап торғандарға! Һөйөү-көйөүҙе белмәгән йәнһеҙ-бәғерһеҙ әҙәмдәргә...

Араҡы табып эсергә ине...

Афғанда улар ҡышлаҡтарҙы тентеп, йә тауҙарҙа духтар менән атышып ҡайтҡас, йәшереп кенә хәмер һемерерҙәр ине. Шулайтһаң, баҫҡан һайын шартлау көтөп, маңлай аша үҙеңә тоҫҡалған мылтыҡ көбәген тойоп арыған мейеләр ирәйеп, тойғолар йомшарып, күңелдәр көрәйеп китер, был тормошта ғазап менән үлемдән башҡа, матур йәшәү барлығы ла күренер ине.

Эйе, эсергә кәрәк... Шунһыҙ булмай...


Аҡса эҙләп берәм-берәм кеҫәләрен ҡапшай башланы. Шунда ҡулдары салғый кеҫәһендә ятҡан ниндәйҙер бер ҡағыҙға төртөлдө. Хат ине был. Нәркәстең хаты. Бәй, ҡасан килеп кергән һуң ул кеҫәгә? Ә-әй, баяғы университет алдында булған ҡыҫҡа ғына янъялда уның кеҫәһенә тығып киткән, ахыры, был хатты Нәркәс.

"Һин армияла саҡта мин шундай һағындым һине, юҡһындым. Хаттарыңды үбер инем. Һин мине һөйөргә, һөйөләргә өйрәттең бит. Миңә бик ҡыйын булды һин киткәс... Шулай үҙемде ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөгәндә, Н-ды осраттым. Ул шундай һиңә оҡшағайны, һынкилбәте менән дә, хатта үҙ-үҙен тотоуы, һөйләшеүе, холҡо менән. Мин уны - һин, тип, ҡабул иттем шикелле. Әле лә уны һиндәй күреп яратам, буғай. Үҙүҙемде аңламайым. Иҫәрмендер, ахыры, мин... Зинһар, кисерә күр мине. Рәнйемә, нәфрәтләнмә, ғәрләнмә, зинһар! Кәмһетмә мине, үҙең дә кәмһенмә! Ярат мине элеккесә, мин дә бит ирем сүрәтендә һине яратам... Йә, Хоҙай, нимәләр яҙам мин? Хуш..."

Әднәке... Нисек итеп ҡабул итергә һуң уға быны? Нимә, был донъя аҡылдан яҙғанмы шулай, әллә ул үҙе хыялый булып барамы?! Нимә, был ҡәһәрле көн һаман да уны элмәккә башын тыҡтырырға нығышамы шулай итеп?

Ҡайҙан ғына эсергә табырға икән?

Роман исемле егет бар ине уларҙың взводында. Ромка... Йомшаҡ ҡына холоҡло, илгеҙәк, күңелсәк малай. Яратҡан ҡыҙынан хат килһә, шатлығынан күбәләктәй осоп-ҡунып, йылмайып-көлөп йөрөр ине. Бер һөйләшеп ултырғандарында һөйгәненең фотоһын да сығарып күрһәткәйне уға. Настенька, Анастасия... Матур исем... Ә бер көндө Ромка кинәт кенә "һүнде", ҡарайҙы, шымды. Берәйһе быға иғтибар бирҙеме икән? Эйе, ул һиҙгәйне лә быны, тик яҡын барып һөйләшергә, белешергә ҡыйыулыҡ итмәне... Ул да булманы, уларҙы машиналар карауанын наҡлап барырға ебәрҙеләр. Ә унда засада... "Духтар" яҡындағы тауҙан ата башлағас та, бөтәһе лә күҙ асып йомған арала БТР-ҙан, түгелгән борсаҡтай, ҡойолоп төштөләр, ә Ромка, ни сәбәптәндер мыҙылды. Әллә кеймеме БТР өҫтөндәге нимәгәлер эләккәйне, әллә йоҡлап килеп аңғармай ҡалды... Нисек кенә булмаһын, ул, билбуйынһыҙ ҡарт һымаҡ, бик аҡрын, наҡ ҡыймылданы, шул саҡта үҙе, ниҙәндер уңайһыҙланғандай, йәпһеҙ генә йылмая ине...



Ҡанға буялған хәрби билет эсендә Настяның дүрткә йыртылған фотоһы...

Был юғалтыуҙы барыһы ла бик ауыр кисерҙе. Яҡындағы ҡышлаҡтан спирт табып эстеләр...

Ул ошо тирәлә урынлашҡан биш-алты аҙыҡ-түлек магазинының урап сыҡты. Әммә бер ҡайҙа ла араҡы юҡ ине. Дөрөҫөндө, хәмер ҙә, шарап та бар, тик улар талон буйынса ғына һатыла. Һәр кешегә - ике шешә. Ә талондар прописка буйынса ғына бирелә, имеш. Быны аңлағас, һалдат сиратта торғандарға аҡса тәҡдим итеп ҡараны. Һат, зинһар, икеләтә, хатта өсләтә хаҡҡа алам, тип. Ләкин, бер кем дә яйға килмәне. Араҡының аҡсанан да ҡиммәт, ҡәҙерле сағы ине, ахыры, эсеп кенә күңел йыуатырға күнеккән халыҡ өсөн.

Илдәге "сухой закондың" иң ҡыҙған, иң ҡаты мәле ине шул. Был иҫәрлектән әлегә арымаған халыҡ көмөшкәгә лә тотонмаған, "итәк аҫтынан" һатыу итергә лә оҫтармаған.

Бөгөнгө мәғәнәһеҙ кисерештәрҙән изгеләнгән егеттең күңеле был хәлде сираттағы, һәм тик үҙенә генә ҡаршы йүнәлтелгән мыҫҡыл рәүешендә ҡабул итте. Ысынлап та, башҡалар бер ҡаршылыҡһыҙ һатып алған эсемлек уға тейеш түгел ине был ҡалала. Сөнки уның талоны юҡ. Ә инде ошо көн күҙлегенән ҡарағанда, уның бер нәмәгә лә талоны юҡ. Мөхәббәткә лә, бәхеткә лә, яҡты хыялға ла, араҡыға ла...

"Дөрөҫтө яҙырға ҡурҡтым. Һинең өсөн ҡурҡтым", - тигән Нәркәс хатында. Һы... Барыбер үлтерәһең даһа мине, Нәркәс! Ут менән язалағандай ғазаплап, инрәтеп, мыҫҡыллап үлтерәһең. Юҡ, мин элмәккә тыҡмам муйынымды, нисек тә йәшәрмен, һаман да тапармын ошо бысраҡ донъяны аяҡтарым менән. Тик һине фәрештәләй күреп һөйгән матур, ихлас егет үлер миндә, мәңгегә юғалыр бөгөн. Йәл, бик йәл, бик ҡыҙғаныс. Һәйбәт кеше ине бит ул...

Эйе, был йәһәттән, дошман йәҙрәһенән үлгән Ромка бәхетлерәктер ҙә, бәлки. Ул оҙаҡ ыҙаламаны ҡыйырһытылған бәғер сире менән...

Бер нисә ҡат ул, барлыҡ ихтыярын егеп, йөрөген изгән кисерештәренән арынырға, күңел күҙҙәрен асып тирә-йүндәге матурлыҡты күрергә маташты. Шул мәлдә устары менән битен һыпырғылап, гүйә, сикәләрен йыуҙы, мейеһендәге сирле уйҙарҙан арынырға теләгәндәй, башын һелкте, кителен рәтләне, ҡараштарын күтәреп ян-яғына күҙ һалды. Ә ундағы битараф тормош, уның ҡайғыһын бар тип тә белмәйенсә, үҙенсә аға ине. Егет әлеге хәлен ташлап, шул ағымға эләгергә уҡталды. Ысынлап та, нимәгә көйөп, юҡтан ғына үҙ-үҙен бөтөрөп йөрөй әле ул бынауындай матур көндә! Сәсрәп китһендәр Нәркәсе лә, бүтәне лә! Уныһыҙ ҙа йәшәй алыр, ана даһа аҙым һайын осрап тора ҡаршыһына балғалаҡҡа ғына һалып йоторлоҡ сибәркәйҙәр! Таныш шуларҙың берәүһе менән, һөйләш, алкаш һымаҡ араҡы эҙләп йөрөгәнсе! Шунда күңелең дә үҫер, донъяң да яҡтырыр!

Әммә уның был ынтылышы, күпме серәнһә лә, оҙаҡҡа барманы. Еүеш утынға ут төртөп аҙапланыуға оҡшай ине был. Туҙы ғына ләүкеп яна ла, тоҡана алмайынса һүнеп, әсе төтөнө менән күҙҙәрҙе йәшкәҙәтә...

Ҡаланың был тарафы үҙенең һәр мөйөшө, аҙымы, ағасы менән Нәркәсте хәтерләтә ине уға. Бына ошо эскәмйәлә улар көлөшә-көлөшә туңдырма ашағайнылар бер көн... Ә бынауы кинотеатрға киноға килгәйнеләр... Ә бынауы йүкәле аллея буйлап йылы бер май кисендә үткәйнеләр етәкләшеп...

Магазин һайын уңышһыҙлыҡҡа осрап эҙләнә торғас, үҙен театрҙағы мәғәнәһеҙ бер спектаклдә уйнаған әртистәй тоя башланы ул бер мәл. Әйтерһең, барыһы ла уны күҙәтә, әлеге хәлен белә, берәүҙәр уны йәлләп бергә кисерешә, икенселәре хихылдап көлөшә, шул уҡ саҡта уның ҡатнашлығындағы сиратағы ниндәйҙер бер ҡыҙыҡ көтә. Күңеле уның шулай яңлыша ине йән ғазаптарында аҙашып. Ә аҡылы белә: ул үҙе лә, уның ҡайғыһы ла бында бер кемгә хәжәт түгел, хатта баяғы Нәркәс тә, уның ата-әсәһе лә, күҙҙән юғалтҡас та, оноттолар бит уны. Тик ул ғына йөрөй һаман бәләһенә баш була алмайынса, көтөлмәгән хурлыҡтан ағыуланған күңеле менән һыҙланып. Ҡасан уҙыр был ғазап, ниндәй дауа тапмаҡ кәрәк? Аңды юйғансы эсергә араҡы ла юҡ бит, исмаһам. Табырға, мотлаҡ хәмер табып эсергә кәрәк! Юғиһә, аҡылдан яҙыуы ихтимал даһа...

Һы... Тимәк, ул йыл буйына Нәркәстең алдаҡ хаттарына ышанып, шуға ҡыуанып, яуапҡа оҙон-оҙаҡ мөхәббәт хаттары яҙып, ҡыҫҡаһы, тулайым бер иҫәр булып йөрөгән Афғанда! Ә улар уның хаттарын икәүләшеп уҡығандар, унан ултырып яуап яҙғандар. Көлөшә-хихылдаша... Ә яҙып бөткәс, түшәккә ятҡандар...

Һәм ул ҡаланы гиҙеп эҙләндә лә эҙләнде. Тиҫтәнән ашыу магазинда булып уҙҙы. Урамдағы кешеләрҙән һорашты. Араҡы, армияға хәтлем әшәке бер шыйыҡсалай ғына күренгән араҡы, магазин кәштәләрендә теҙелешеп торған төрлө төҫтәге араҡы, кибеп ҡайҙалыр йәшенгән йәншишмәләй тойолдо уға был юлы. Шуны йотһа, эсендәге ҡара бысраҡтай уҡмашҡан ҡайғыһы, ғәрлеге, рәнйеүе бер юлы янып, йыуылып төшөр һымаҡ ине. Ысынлап та, Афғанда ярҙам итә, еңеләйтә торғайны даһа...

Сираттағы магазинда ла уның үтенесе үтмәне. Артабан нишләргә белмәйенсә йөрөй торғас, үҙе лә аңғармаҫтан, магазиндың артҡы ишеге янына килеп сыҡты. Оло ғына йәштәге бер ҡатын кирбес стена янына буш йәшниктәр өйә ине. Араҡы йәшниктәре. Егет тирле усында йомарланып бөткән аҡсаларын тотоп, теге ҡатынға йүнәлде.

- Апай... Миңә бер ярты ғына араҡы һат әле? Өҫләтә хаҡын бирәм!

Ҡатын әйләнде лә уҫал ҡарашын һалдатҡа төбәне.

- Араҡылар шутлы, талон буйынса ғына...

- Беләм дә... Тик миндә ниндәй талон булһын, хеҙмәттән ҡайтып барам, күрәһегеҙ ҙаһа? Һеҙҙә, барыбер, иҫәптән тыш запас булырға тейеш бит...

- Күрсәле һин уны, ҡайһылай аҡыллы! - асыуынан ҡатындың йөҙө ҡыйшайҙы, күҙҙәре атылып сығырҙай булып түңәрәкләнде. - Юғал күҙ алдымдан, ыстырам! Йәп-йәш килеш эске эҙләп йөрөмәһәң тағы!

- Апай, ҡыйын миңә... Миңә эсергә кәрәк...

- Кит, тием, оятһыҙ! Бында служебный ход, ситтәргә йөрөргә ярамай! Хәҙер милицияға шылтыратам!

Һалдат күҙ алдында шиңде. Тағы ниҙер әйтергә уҡталды ла тотлоҡто, китергә боролдо. Һәм шунда аяҡ аҫтындағы йәшникҡә абынып, бар көүҙәһе менән шапылдап ергә ҡолап төштө. Тирәсле фуражкаһы ситкә тәгәрләне.

- Тьфү, быҙау! Ҡайтып, һыйыр һымаҡ эсәләр ҙә, йөрөйҙәр бахмурҙан хәлдәре бөтөп! Тьфү!

Һалдат аяғына баҫты, бысранған өҫ-башын ҡулдары менән ҡаҡҡылап алды. Һәм шунда, көтмәгәндә, таш стенаға ҡапланып, маңлайын кирбестәргә һуға-бәрә, иңрәп илап ебәрҙе.

- Араҡы бирегеҙ... Эскем килә!

Ишектән кереп барған ҡатын артына боролдо ла, был хәлгә таң ҡалып урынында ҡатты.

- Атаҡ-атаҡ? Нимә булды, уланҡайым, ауыртындыңмы әллә? Насармы әллә һиңә?

Һалдат стенанан шыуышып йәшниккә ултырҙы, һулҡылдап, алдына ҡапланды.

- Миңә эсергә кәрәк, апай... Насар миңә, хөрт миңә... Аҡылымдан яҙып барам бит!

- Әй-й, әттәгенәһе! Айыҡ таһа... Ҡайғың ҙур, ахыры, уланҡайым, ҡарале, нисек быуылаһың! Хәҙер уланҡайым, хәҙер сығарам араҡы!

Йәшник өҫтөндә ултырған һалдат тыйылғыһыҙ ныҡтап, алдына һығылып төштө. Бынан сикһеҙ оялды үҙе, әммә баҫыла алманы. Шәфҡәтһеҙ бер көн эсендә күңеленә кереп тулған барлыҡ һыҙланыуы, ғәрлеге менән рәнйеүе, әйтерһең дә, яҙғы ташҡында йырылған быуа булып алҡына ла алҡына ине шулай.

Тулы стакан араҡыны күтәрә бирҙе лә, кире урынына ҡуйҙы һалдат. Ғәйепле төҫтә һатыусыға баҡты.

- Эсә алмайым, апай... Ғәфү итегеҙ мине, - тине лә, аяғына баҫты һәм кешеләр араһына инеп юғалды.

Уның күңеле бөгөн кисергән ғазаптарынан күҙ йәштәре аша таҙарынғайны.

Уны бит атай-әсәйе, тыуған йорто, яҡындары көтә!..

(Аҙағы. Башы 35-се һанда).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

11 сентябрь - Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли кейеменә арналған көн. Был байрам хәҙер матур йолаға әүерелеп бара. Ә һеҙ үҙегеҙҙең ырыу-тамғағыҙҙы һәм милли кейемегеҙҙе беләһегеҙме?



Арыҫлан БИКБАЕВ, рәссам-дизайнер: Ейәнсура районында тыуып-үҫкәнмен, ырыуым - үҫәргән, тамғабыҙ атаманы - ҡойошҡан.

Беҙҙең милли кейемдәр көньяҡ-көнсығыш комплексҡа ҡарай. Мин үҙем тегеү, реконструкция менән шөғөлләнмәһәм дә, милли кейем өлөштәрен замансалаштырыуҙа һәм көндәлек тормошта ҡулланырға яраҡлаштырыу өҫтөндә эш алып барам. Мәҫәлән, ырыу исемдәре яҙылған һәм тамғалары күрһәтелгән кейемдәр эшләйбеҙ. Тотош милли костюмды һәр ваҡытта ла кейеп йөрөүе уңайһыҙыраҡ, минеңсә, ә һине башҡаларҙан айырып торған орнаменттар баҫылған заманса кейемде ҡайҙа ғына барһаң да кейеп йөрөргә була һәм был әйләнә-тирәләгеләрҙең иғтибарын йәлеп итә, башҡа милләт кешеләрендә ҡыҙыҡһыныу уята. Был күренеш бөгөн тарала бара.

Орнаменттарҙы, һүрәттәр өсөн мотивтарҙы музей өлгөләренән, этнографтарҙың хеҙмәттәренән, милләтебеҙҙең һынлы сынғатенә бағышланған китаптарҙан алам. Костюмдарҙы, төрлө өй йыһаздарын: балаҫ йә ағас науыт-наба һ.б. ҡарап, өйрәнеп, уларҙың ҙур йә бәләкәй өлгөләрен үҙебеҙҙең йәшәү рәүешенә индереүгә булышлыҡ итәм. Улар музейҙа һәм китаптарҙа ғына һаҡланмаһын, өләсәйҙәрҙең һандыҡтарында ғына ятып ҡалмаһын, тигән маҡсатта башҡарыла был эш.

Сәимә ХӘСӘНОВА, модельер, Рәсәйҙең Евразия этнодизайнерҙар ассоциацияһы ағзаһы: Беҙҙең Күгәрсен районының Теләүембәт ауылы ҡыпсаҡ ырыуына ҡарай. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ерлеккә тап килгән кейемдәр, биҙәүестәр, шул уҡ ҡашмау-елəндәр кемдәлер һаҡлап ҡалынғанын, беҙ бәләкәй саҡта оло быуын уларҙы кейеп йөрөгәнен дә күргәнем булманы. Ете йәшемдә ҡартәсәйем үҙе күргəндәренән миңә бал итәкле күлдәк, камзул һәм арт яғынан ҡашмауҙыҡы кеүек оҙон олоно булған, биҙәктәр һалынған таҡыянан торған костюм тегеп биргәйне. Өфөнән килеп фотоға төшөрөп киткəндəрен дə иҫлəйем. Мəктəпкə барыр алдынан мин шул кейемде кейеп, башҡорт бейеүен бейегәнемде ҡарағанда атайым күҙҙәренә йәштәр тулғаны хаҡында хәтерләй ине. Ҡомартҡы булып һаҡланһын тип, ул костюмды үҙем уҡыған гимназия музейына алып барғайным да, хәҙер фотоларҙа ғына ҡарарға ҡалды шул...

Бөгөн, Аллаға шөкөр, милли кейемгә ҡарата иғтибар, уның ҡиммәте арта. Башҡорттар араһында үҙ эшен яҡшы белгән этнодизайнерҙар ҙа күбәйә хәҙер, уларҙың һәр береһенең эше тәрән йөкмәткегә эйә, һәр ваҡ элементына саҡлы ентекле итеп башҡарыла. Бөгөнгө механик рәүештә баҫтырылып сығарылған тауарҙар заманында был ысынлап та иғтибарға лайыҡ тип уйлайым. Милли костюмдар өҫтөндә эшләүҙең ни тиклем ауыр хеҙмәт икәнен аңламағандар ғына тәнҡит менән мәшғүл. Мин үҙем модельер, беҙ үҙебеҙҙең отельела миллилекте пропагандалау маҡсаты менән стилләшетерелгән образдар өҫтөндә эшләйбеҙ. Мәҫәлән, "Таң һылыуы", "Күңел моңо" тип аталған коллекциялар бар. Һуңғы ике йыл эсендә генә беҙ уларҙы Коканд, Тараз, Бохара, Бишкәк, Мәскәү, яңыраҡ ҡына Санкт-Петербург һ.б ҡалаларҙың сәхнәләрендә, подиумдарында күрһәтеп ҡайттыҡ. Коллекцияла хәҙер беҙҙең брендҡа әүерелгән аҫалы баласаҡтарҙы һәм башҡорт шәлен Гүзәл Мостафина, Сажидә Муллағолова кеүек ҡул оҫталары менән берлектә кейемгә һалып, подиумға сығарабыҙ. Оҙаҡламай тап мамыҡ шәлгә арналған образдарҙың премьераһы көтөлә.

Беҙҙең кейемдәр киң йүнәлешле, сәхнә йә ниндәйҙер тантаналы саралар өсөн бик тә килешле итеп тегелә. Уларҙы ниндәйҙер ерлеккә лә бәйләмәйбеҙ, әммә шулай ҙа, мәҫәлән, ҡайһы бер образдарға Силәбе йә Ҡурған башҡорттарына хас орнаменттар һалынған. Әммә бер орнаментты икенсе менән бутап, йә берләштереп һуғырға ярамай, сөнки был тарихи яҡтан хата буласаҡ. Шулай уҡ стилләштерәм тип, ярым-яланғас образдар барлыҡҡа килтереү килешмәгәнен, халҡыбыҙға хас тыйнаҡлыҡты онотмау мөһим. Һәр элемент үҙ урынында булырға тейеш, мәҫәлән, аяҡ кейеме булған сарыҡтың арт яғындағы биҙәктәрҙе күлдәк түшендә, ә биҙәүестәрҙе итәктә урынлаштырыу оҫтаның тотонған эшенә төшөнөп етмәүен генә аңлата. Шулай итеп, ҡулыбыҙҙан килгән ҡәҙәр беҙҙең аҫыл халҡыбыҙ хаҡында, уның кейемдәренең, биҙәктәренең матурлығын мөмкин тиклем күберәк кеше белһен тип, бар көсөбөҙҙө һалабыҙ.

Айһылыу ДАУЫТОВА яҙып алды.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

МИЛЛИ КЕЙЕМ АҪЫЛ...

Аһ, ниндәйен тылсым!
Сулпы сыңы - сың-сың,
Мөғжизәме? Ысын!
Шундай матур, ыҡсым!
Аһ, ниндәйен аһең!
Хазина бит кейһең,
Ҡашмауҙары ҡупшы,
Йыялмайым һуштың!
Аҫыл ғына таштар
Йырлайҙар моң ҡушып!
Аһ, ниндәйен күлдәк!
Зиннәтле лә ебәк.
Әберкәле итәк,
Аҫыл асыр биҙәк,
Йәме йәнгә, тимәк!
Аһ, ниндәйен елән!
Аҡбуҙатта елəм.
Яугирбикә булып
Күккә шоңҡар сөйəм,
Ян-уғымды теҙəм!
Аһ, ниндәй хәситә!
Һомайғоштай итә
Тағып алыуҙарың,
Һөйөп бағыуҙарың,
Ҡанат ҡағыуҙарың!
Аһ, ниндәйен һаҡал!
Быуаттарҙан аҡыл!
Ташы мәрүәт, аҡыҡ,
Түләп алаламаҫһың
Ат ҡына ла хаҡын!
Аһ, ниндәйен тамға,
Асылыма, ҡанға!
Быуат төпкөлөнән
Йән хәтерен һаҡлап,
Ҡомартҡылай ҡалған!
Аһ, ниндәйен йөҙөк,
Көмөш ҡуш беләҙек.
Балҡып тора йөҙөм,
Алдашмай ул көҙгөм,
Ҡәҙерҙәрем белеп!
Аһ, ниндәйен яулыҡ,
Нәзәкәтле зауыҡ!
Өләсәйҙән мираҫ
Фөлөр - ҡушъяулығым
Ябынайым яҙып.
Милли кейем аҫыл
Асылыңды асыр!
Күҙ тейеүҙәр, боҙом,
Яман күҙҙәр, сихыр
Алыҫтарға ҡасыр!

Айзилә МОРТАЕВА.



✓ *Мөхәммәт (с.ғ.с) үҙенең өммәтенә күбеһенсә үләндәр, емештәр менән дауаланырға кәңәш иткән һәм дауаның сығанағы итеп Ҡөрьән һәм балды билдәләгән. Аяҡ аҫтында үҫеп ултырған һәр үләндә төрлө ауырыуҙарға шифа бар.*

ИНТЕРНЕТТАН



БЕҘҘЕКЕЛӘР ҘӘ...

һимеҙлектән яфалана, имеш

■ Берләшкән Милләттәр ойошмаһы мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, Рәсәй һәр өсөнсө кешеһе һимеҙлек менән яфаланыусы егерме дәүләттең рәсми булмаған исемлегенә ингән. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы хатта халыҡҡа сәләмәтлекте ҡайтарыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге тураһында айырым ҡарар сығарған. Етәкселәр рәсәйлеләрҙе йәйәү йөрөргә, тәүлегенә 8 грамдан артыҡ тоҙ ҡулланмаҫҡа һәм еләк-емеш, йәшелсә менән күберәк туҡланырға саҡырмаҡсы. Рәсәй хәҙер артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар һаны буйынса илдәр араһында өсөнсө урында тора. Барыһына ла туҡланыу мәҙәниәте ғәйепле, тип саң ҡаға диетологтар. Һуңғы йылдарҙа уртаса статистик рәсәйленең өҫтәлен ярымфабрикаттар һәм майонез биләй икән. Белгестәр, һимеҙлек барлыҡҡа килеүҙең төп сәбәбе ошонда, тип фаразлай.

■ Джон Хопкинс балалар үҙәге хеҙмәткәрҙәренең тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, организмға D витамины етешмәһә, балаларҙа аҙ ҡанлылыҡ барлыҡҡа килеү хәүефе күтәрелә. 10 меңдән ашыу баланы тикшереп ҡарағандан һуң, D витамины кимәле гемоглобины түбән булған балаларҙа кәмерәк булыуы асыҡланған. Шулай уҡ афроамериканлылар аҡ тиреле балаларға ҡарағанда анемия менән күберәк яфалана икән. Быға тиклем "ҡояшлы витамин" һәм анемия араһында бәйләнеш аҙағына тиклем асыҡланмаған, шулай ҙа ғалимдар был витаминдың эритроциттарҙың бүленеп сығыуына тәьҫир итеүен раҫлаған да инде.

■ Массачусет университеты тикшеренеүселәре кешелә уны даими рәүештә көрәшкә этәреп тороусы психологик мохтажлыҡ бар, тип раҫлай. Тап ошо кешеләрҙе һуғыш башларға, төрлө енәйәттәр яһарға, үҙ-ара талаштар, низағтар, шул иҫәптән интернетта үҙ битен булдырырға ла этәрә икән. Хәҙерге заман психологияһы ни тиклем алға китһә лә, белгестәр был проблеманы нисек еңергә икәнлеген билдәләй алмаған.

■ Әйләнә-тирәгеҙҙәге кешеләр төрлө ҡылыҡтары менән йәнегеҙгә тейә башлаһа, ҡыштырлатып ҡына аҡсағыҙҙы һанап алығыҙ. Миннесота университеты ғалимдары кешеләрҙе ике төркөмгә йыйған да, тәүге төркөмгә 80 йөҙ долларлыҡ купюра, ә икенсеһенә ҡырҡылған ябай ҡағыҙ иҫәпләргә ҡушҡан, йәнәһе, бының менән улар ҡатнашыусыларҙың ҡулдарының сослоғон тикшерә. Бынан һуң барыһы ла компьютер программаһы менән туп ташлау уйынын уйнаған, әммә быны береһе лә белмәгән һәм ысын кеше менән уйнайым, тип иҫәпләгән. Ғалимдар программаны махсус рәүештә шулай көйләгән, компьютер уйынсыны төрлө ҡылыҡтары менән сығырынан сығарырға маташҡан. Уйын алдынан аҡса һанаусылар үҙҙәрен күпкә яҡшыраҡ тойған һәм бер нәмәгә лә иғтибар биреп бармаған. Икенсе бер тәжрибә барышында унда ҡатнашыусылар ҡулдарын эҫе һыуға тығырға тейеш булған. Аҡса һанаусылар ҡулдарын эҫе һыуҙа оҙағыраҡ тота алған. Ғалимдар әйтеүенсә, аҡса купюраһына тейеп алыу кешенең үҙенә ҡуйған баһаһын күтәрә, үҙенә ышанысын арттыра, һөҙөмтәлә, ул ауыртыуҙы ла еңел кисерә. Әйткәндәй, быға тиклем билдәле булыуынса, аҡсанан кешеләр аҡыллана, етмәһә, аҡсалы кешеләрҙең йоҡоһо ла яҡшыраҡ була.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

ДАУАЛАЙ ТИП ЫШАНЫП...

күрәҙәсегә, сихырсыға барма берүк

Һуңғы йылдарҙа халыҡтың ышанысанлығынан, берҡатлылығынан файҙаланып, сирҙәрҙе дауалайбыҙ, яҙмыштарҙы күҙаллайбыҙ, тип, күрәҙә һәм сихыр менән шөғөлләнеүсе һәм шул юл менән мал йыйыусы ялғансылар күбәйҙе. Был шөғөл Ислам диненә, мосолмандарға ғына түгел, бөтә халыҡҡа ҙур зыян килтерә. Сөнки сихыр һәм күрәҙәлек - Аллаһҡа һәм Уның Бәйғәмбәренә ышанмау, Уларға итәғәт итмәү, тигән һүҙ.



Әлбиттә, Исламда төрлө халыҡ дауалары менән дә дауаланыу рөхсәт ителгән. Ләкин мосолман кешеһе тейешле белеме, тәжрибәһе булған, шәриғәт рөхсәт иткән саралар ҡулланған ысын халыҡ табиптарына ғына мөрәжәғәт итергә тейеш. Аллаһы Тәғәлә ауырыуҙарҙы бар иткән һәм уларға ярашлы дауаларҙы ла яратҡан. Ысын халыҡ табиптары был турала хәбәрҙар, ә мал йыйыу өсөн генә был эшкә тотонған наҙан кешеләр был хаҡта белмәй. Шуны беләйек: Аллаһ Үҙе хәрәм ҡылған ялған дауалар, күрәҙәлек итеү ҡолдарына шифа бирмәй. Шуға күрә беҙ хәләл менән хәрәмде айыра белергә тейешбеҙ.

Динебеҙ буйынса, күрәҙәселәр һүҙенә, улар еткергән мәғлүмәткә ышанырға ярамай. Сөнки улар ен-шайтандар менән эш итә, был турала хәҙистәрҙә етерлек һәм аныҡ әйтелгән. Ләкин кемдәрҙер күрәҙәселәрҙе, сихырсыларҙы "Уларға шундай талант бирелгән!" тип маҡтап бөтә алмай. Иң оло гонаһтар, яңылышлыҡтар ҡыҙыҡтырғыс һәм мауыҡтырғыс тойола. Әммә былар Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә тарафынан тыйылған.

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһис-сәләм әйткән: "Күрәҙәсегә барып, унан ни ҙә булһа һораған кешенең 40 көн доғаһы (намаҙы) ҡабул булмаҫ". Шулай уҡ: "Күрәҙәсе һәм күрәҙәсегә мөрәжәғәт итеүсе - беҙҙең аранан түгел. Күрәҙәсегә барып, уның һүҙҙәре-нә ышанған кеше Мөхәммәт Бәйғәмбәр (с.ғ.с) өммәтенә ингәндәргә (Ислам диненә) ышанмаусы була",- тигән.

Хәҙерге ваҡытта ниндәй генә гәзит-журналды асып ҡарама, күрәҙәсе, экстрасенс һәм төрлө бағымсыларҙың рекламалары менән тулған. Ә халыҡҡа етә ҡала: кемуҙарҙан, юҡ аҡсаларын бар итеп, маҡталған күрәҙәсе-экстрасенстарға ағылалар. Мәҙәк эҙләүме, сараһыҙлыҡтың сигеме, әллә наҙанлыҡмы был?

Сихыр - хәрәм ҡылынған һәм көфөрлөккә илтә торған эштәрҙең береһе. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әйткән: "...һәм улар Сөләймән батшалығында шайтандар уҡыған нәмәгә эйәрҙеләр. Сөләймән кафырҙарҙан түгел ине, ә Бабилда Һарут менән Марут тип аталған ике фәрештәгә төшөрөлгән нәмәне һәм сихырҙы кешеләргә өйрәтеп, шайтандар иманһыҙ булды. Әммә был икәү: "Беҙ фетнә-һынау ғына, иманһыҙ була күрмә!"- тип алдан әйтмәйенсә тороп, бер кемде лә өйрәтмәне. Улар шул ике фәрештәнән ирҙе һәм ҡатынды нисек айырырға икәнлеген өйрәнделәр. Әммә улар Алланың рөхсәтенән башҡа быныҢ менән берәүгә лә зарар килтермәнеләр. Улар, үҙҙәренә зарар килтереп, файҙа бирмәй торған нәмәгә өйрәнделәр, һәм улар быны һатып алған кешенең киләсәк тормошта өлөшө булмауын белләр ине. Үҙ йәндәре бәрәбәренә һатып алған нәмәләре насар булды. Әгәр улар быны белһә ине!" ("Әл-Бәҡара" сүрәһе, 102-се аят).

Аллаһы Тәғәлә Үҙенең Бәйғәмбәре аша ҡолдарына сихыр зәхмәтенән нисек арынырға, дауаланырға өйрәткән. Сихырҙан һаҡланыуҙың иң көслө сараһы - доға һәм Аллаһҡа зекер әйтеү, "Аятел Ҡөрси", "Ихлас," "Фәләҡ" һәм "Нәс" сүрәләрен уҡыу. Хаҡ мосолман булған кеше үҙен ауырыу йә насар итеп тойһа, иң тәүҙә күрәҙәсегә һәм бағымсыға йүгермәҫ, ә Аллаһтан шифа һорап доға ҡылыр, табиптан диагнозын белешеп, Бәйғәмбәребеҙ өйрәткәнсә дауаланырға тырышыр.

Мөхәммәт (с.ғ.с) үҙенең өммәтенә күбеһенсә үләндәр, емештәр менән дауаланырға кәңәш иткән һәм дауаның сығанағы итеп Ҡөрьән һәм балды билдәләгән. Аяҡ аҫтында үҫеп ултырған һәр үләндә төрлө ауырыуҙарға шифа бар. Был әллә ҡасан уҡ иҫбат ителгән. Әммә кешеләр дауаланыуҙың еңел ысулын эҙләпме, әллә үҙ-үҙенә ышанмау арҡаһындамы, үҙенең һаулығын, хатта булмышын сихырсы-күрәҙәселәр иркенә тапшыра.

Сихырҙы дауалау өсөн шәриғәт тарафынан рөхсәт ителгән дауалар бар. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләмгә боҙом ҡылынған ваҡытта Аллаһы Тәғәлә уны был яуызлыҡтан ҡотҡарған. Бары тик сихырсы эшләгән боҙомдо табып, уны юҡҡа сығарғандар. Шуның менән Аллаһ Үҙенең Бәйғәмбәренә шифа биргән. Ғәҙәттә, сихырсылар ептән төйөндәр яһап йәки ҡаҙаҡтарҙы бер-береһенә беркетеп, шуға өрәләр һәм нуғалар. Әгәр был әйберҙәрҙе табып юҡ итһәң, Аллаһ ихтыяры менән сихыр зәхмәте лә бөтә.

Әгәр ауырыу үҙ аҡылында булһа, ҡайһы ваҡыт уның үҙенән Ҡөрьән уҡытып та дауалайҙар. Ә ҡайһы саҡта кемдер берәүҙең доға уҡып, ауырыуҙың күкрәгенә йәки башҡа еренә өрөүе генә лә шифа бирә. Был ваҡытта "Фәтиха", "Аятел Ҡөрси", "Әғраф", "Юныс" һәм "Тәһа" сүрәләренең мәғлүм аяттарын, "Кәфирүн" һәм Ҡөрьәндең һуңғы 3 аятын уҡырға кәрәк. "Ихлас", "Фәләҡ", "Нәс" сүрәләре өсәр тапҡыр уҡыла. Һәм Аллаһҡа дауаланыуға өмөт менән доға ҡылырға кәрәк. Дауалаусы - Аллаһ Үҙе. Ул һәр нәмәгә ҡөҙрәтле. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әйткән:

"Дауаһын барлыҡҡа килтермәйсә, Аллаһы Тәғәлә бер сирҙе лә барлыҡҡа килтермәгән. Белеүселәр - был хаҡта белә, белмәгәндәр - белмәй".

Мөхәмәтйәр Нәжметдиндең "Сихыр һәм күрәҙәселек" китабынан.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

ЙӘШЕН ВАҠЫТЫНДА...

самолетта хәүефле



Көслө йәшен ваҡытында Өфөгә килгән бер нисә самолет запас аэродромдарға китергә мәжбүр булды. Йәшен ваҡытында осоуҙың хәүефле булыуы хаҡында "Башинформ" агентлығына отставкалағы һауа судноһы командиры, аэрофлот отличнигы, Өфөнән Андрей Гладунов хәбәр итте.

➔ **Андрей Вячеславович, самолет өсөн йәшендең төп ҡурҡынысы нимәлә?**

- Был авиация өсөн етди хәүеф. Бөтә документтарҙа нығытылған: йәшенгә инеү тыйыла. Йәшенде ниндәй алыҫлыҡта урап үтергә тигән норматив бар.

Әгәр быны иҫәпкә алмаһаҡ, йәшен самолетҡа эләгеүе, ул саҡта электрон һәм радионавигация ҡорамалдары эшләмәүе ихтимал. Авиация тарихында бындай осраҡтар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бар.

➔ **Самолет йәшенле болотта ҡалһа, нимә эшләргә?**

- Бындай хәлдә хәүефле зонанан сығыу мөһим. Бортта метеолокаторҙар бар, улар урындағы рельефты баһаларға мөмкинлек бирә. Болоттарҙан тауҙар менән бәрелешмәҫ өсөн рельефты түбәнәйтеү яғына сығалар. Был стандарт алгоритм.

➔ **Яңыраҡ Магнитогорск аэропортына ултырырға мәжбүр булған Калининград - Өфө рейсы пилотының эшмәкәрлеген нисек баһалайһығыҙ?**

- Пилот Евгения Киреева бик яҡшы эшләне, үҙ бурысын 100 процентҡа үтәне. Пассажирҙар менән самолет имен төштө, бер кем дә зыян күрмәне. Диспетчер менән килешеп, запас аэродромға китеү ҡарары бик дөрөҫ була.

✓ *Яңы ғына атларға өйрәнгән баланың йәшел тәбиғәт менән беренсе танышыуы тап бына ошо үсемлек менән башлана. Сөнки күгүлән ишек алдарын тултырып үсеп, кеше йәшәмәгән урындарҙа бөтөнләй осрамай тиерлек.*

ИРӘНДЕК ҮСЕМЛЕКТӘРЕ

КҮГҮЛӘН



Күгүләндәр ҡалҡҡас, ҡайтам әле
Үҙебеҙҙең тауҙар яғына…
Ғәлим Дәүләтов

Ауылдарҙа урам буйын, йорт-ҡура тирәләрен йәшел келәм булып баҫҡан был үлән (горец птичий, спорыш - *Polygonum aviculare L.*) иң ныҡ таралған үсемлектәрҙең береһелер. Уның ҡарабойҙайға оҡшаған өс ҡырлы ҡара-көрән орлоҡтарын ҡош-ҡорт, бигерәк тә турғайҙар, яратып ашай. Бәлки, шуға күрәлер ҙә уны халыҡ араһында "бәпкә үләне", тип тә йөрөтәләр. Рус халҡы араһында ул "трава-мурава", "птичья гречиха", "гусятник" исемдәре менән билдәле.

Яңы ғына атларға өйрәнгән баланың йәшел тәбиғәт менән беренсе танышыуы тап бына ошо үсемлек менән башлана, тиһәк, бер ҙә хаталанмаҫбыҙ төҫлө. Сөнки күгүлән, бая әйтмешләй, ишек алдарын тултырып үсеп, кеше йәшәмәгән урындарҙа бөтөнләй осрамай тиерлек. Һис һүҙһеҙ, уның орлоҡтарын таратыуға кеше, йорт хайуандары, транспорт ярҙам итә.

Күгүлән - ҡарабойҙайҙар семьяһына ҡараған бер йыллыҡ үсемлек. Ул - 10 - 30 см оҙонлоғондағы нәҙек кенә һабаҡлы, ваҡ ҡына овал япраҡлы, аҡһыл-алһыу йәки йәшкелт-аҡ төҫтәге сәскә атып, ергә түшәлеп үсеүсән үсемлек. Күгүлән Башҡортостанда май аҙағынан алып сентябрь бөткәнсе сәскә ата.

Ғына ошо аяҡ аҫты тулып үскән үлән медицинала алмаштырғыһыҙ ҡиммәтле дарыу үсемлектәренән һанала. Медицинала ҡулланыу өсөн уның тамырынан башҡа бөтә өлөшөн дә йыялар. Аптекаларға уны июндән августҡа тиклем йыйып тапшырырға мөмкин. Шуныһын иҫтә тоторға кәрәк: төрлө химикаттар ҡулланылған һәм сүп-сар түгелгән урындарҙа үскән үсемлектәрҙе йыйырға ярамай.

МЕҢЬЯПРАҠ



Әле күптән түгел генә күкрәп сәскә атҡан үләндәрҙең күбеһе ҡурышып, көйөп ергә һылаша. Улар араһында тик бер генә үсемлек, ап-аҡ сәскәләрен ҡояшҡа йылмайтып, ғорур баҫып тора. Был - меңьяпраҡ (тысячелистник лекарственный - *Achillea millefolium L.*). Ағас кеүек ҡатҡан һабағы елгә лә бирешмәй. Ҡыҙарып көйә башлаған башҡа үсемлектәр араһында ап-аҡ йәки алһыу булып ултыра ул. Йәйҙең һуңғы көндәрен дә, аяҙлы-болотло көҙҙә лә көтөп аласаҡ әле меңьяпраҡ. Тик көндәр тамам һыуынғас, быҫҡаҡлап ямғырҙар һибәләй, ырашҡы яуа башлағас ҡына баш эйәсәк был үсемлек. Хатта кипкәс тә, ҡар-бурандар батшалыҡ иткән осорҙа ла, ул үсемлек донъяһының бөтмәгәнен хәбәр итә: хуш еҫле көрзинкәләре орлоҡтан айырылмай.

Меңьяпраҡ бөтә Европала, Гималай тауҙарында һәм Төньяҡ Америкала таралған. Ул тәбиғәттең һәр төрлө һынауҙарын еңел кисерә: эҫегә лә, һыуыҡҡа ла бирешмәй, оҙаҡ ҡына ваҡытҡа ҡалын ҡар аҫтында ҡалһа ла һау сыға, дым етмәүенә лә иҫе китмәй. Тупраҡты ла айырып тормай ул. Шулай ҙа кипкән тиреҫле, ҡом ҡатыш ерҙә, торфлы урында, һыубаҫар болонлоҡтарҙа йышыраҡ осрай. Ҡоро ерҙәрҙә, билдәле, меңьяпраҡ зәғиф, бәләкәй була, ә урман ситтәрендә, аҡландарҙа оҙон буйлы, һутлы булып, тарбаҡланып үҫә. Тармаҡ тамырлы был күп йыллыҡ үсемлек тәүҙә япраҡ ебәрә, һуңынан ботаҡлана.

Меңьяпраҡтың сәскәләре эре түгел, кескәй генә көрзинкәгә йыйылғандар. Сәскәләренең төҫө күберәк аҡ йәки алһыу була, ә бейек тауҙарҙа ҡыҙғылт, ҡарағуҫҡыл-ҡыҙыл, хатта ялтырауыҡ алһыу төҫкә инә, сөнки тауҙарҙа һеркәләндереүселәр аҙ һәм уларҙы күҙгә ташланып торған асыҡ төҫ менән ылыҡтырырға тура килә. Япраҡтары бик күп булып, бер үҙәккә теҙелеп үҫә. Бында әллә йөҙ, әллә мең япраҡ инде! Исемен дә был үсемлек ошо билдәһе буйынса алған. Ә латинса исеме - Ахиллия - боронғо легенда менән бәйле. Троян һуғышының батыры Ахилл ошо үлән менән яуҙаш дуҫтарының яраһын уңалтҡан тип телгә алына легендала. Бына шунан киткән инде был үсемлекте ахиллия миллифолиум тип атау.

Башҡортостанда меңьяпраҡтың бер нисә төрө үҫә. Иң күп таралғаны - шифалы меңьяпраҡ һәм Азия меңьяпрағы. Ул дарыу сырьеһы хоҡуғы менән бөтә донъя фармакопеяһына ингән. Көтөүлектәрҙә, юл буйҙарында, аяҡ аҫтында тапала-иҙелә ҡырталашып үҫкән меңьяпраҡтың мең төрлө шифаһы бар. Составында азулен исемле ҡатнашма булыу арҡаһында ул һуңғы ваҡыттарҙа йөрәк дарыуҙары эшләү өсөн киң ҡулланыла.

Меңьяпраҡтың сәскәләрен йыйып күләгәлә киптерәләр. Меңьяпраҡ зарарлы бөжәктәрҙе бөтөрөүсе төнәтмә булараҡ та ҡыҙыҡлы. Был юлы уны күберәк баҡсасылар файҙалана. Ағасҡа төшкән ҡорттарҙы бөтөрөү өсөн меңьяпраҡ ҡайнатмаһын һибәләр. Төнәтмәне һәр баҡсасы үҙе әҙерләй ала.

Меңьяпраҡтан төнәтмә. 1 биҙрә һыуға 1 кг тирәһе киптерелгән үлән, 20 г һабын кәрәк. Тәүҙә үләнде ҡайнаталар һәм 40 минут тирәһе тондоралар, һуңынан тейешле күләмгә тиклем һыу өҫтәп, унда һабынды иреткәс, төнәтмә әҙер була.

АРЫҪЛАН ҠОЙРОҒО



Ҡалдыҡ ерҙәрҙә үҫкән был үсемлекте күптәр һуҡыр кеserткән үләне менән бутайҙар. Эйе, арыҫлан ҡойроғоноң (пустырник пятилопастный - *Leonurus quinquelobatus L.*) һуҡыр кесерткәнгә бер аҙ "туғанлығы" булһа ла, ул унан бейеклеге менән дә (метр ярымға етә), һабағының төҙөлөшө яғынан да ныҡ айырыла. Уның сәскәләре август бөткәнсе ҡойолмай ултырғанға күрә, бал ҡорттары унан йәй буйы бал йыя. Йәй нисек кенә ҡоро килмәһен - арыҫлан ҡойроғо күпләп үҫкән урында бал ҡорттары һәр саҡ бал йыя ала. Унан йыйылған бал һәр саҡ ҡытә күренмәле була, ауыр тарта. Был үлән сәселгән майҙандың гектарынан бал ҡорттары 385 килограмға тиклем бал йыя. Бындай балды, ғәҙәттә, кесерткән балы, тиҙәр.

Үҫкән урынына ҡарап, уны рустар "пустырник" тип атағандар. Сөнки ул буш ҡалған элекке нигеҙ-ҡаралты урындарын үҙ итә. Ә бына латинса ғилми исеме *(Leonurus)* - ғәжәп инде, башҡортсаға тап килә - "арыҫлан ҡойроғо" тигән һүҙҙе аңлата.

Арыҫлан ҡойроғоноң һабағы дүрт ҡырлы, кеше бейеклегендә, ос яғына ҡарай бер нисә сатаға айырылып китә. Киң япраҡтары бармаҡ һымаҡ булып эре телгеләнгән, алһыу төҫтәге ваҡ ҡына ике иренле сәскәләре июнь айҙарында күренә башлай, емеше - өс ҡырлы өрөк. Уның составында 30 %-ҡа тиклем төрлө майҙар бар. XVIII быуатта уҡ Европа илдәрендә был үсемлектән сүс алғандар, төрлө туҡымалар эшләгәндәр.

Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: унан ҡарағуҫҡыл йәшел буяу алғандар. Уның менән итек майлағандар, дегет урынына ҡулланғандар.

Аптекалар өсөн арыҫлан ҡойроғон әҙерләү артыҡ ҡыйын түгел. Уның өҫкө өлөшөн сәскә ата башлаған осорҙа йыйып, күләгәле урында киптерәләр. Йөрәк эшмәкәрлеген яйға һалыу өсөн иң күп ҡулланылған үсемлектәрҙең береһе ул.

ҺЫУ БОРОСО



Йәшел, ә көҙгә табан ҡыҙғылт һабаҡлы, оҙонса япраҡлы һыу боросо (горец перечный) һыу буйҙарында, һаҙлыҡ ситтәрендә, һуғарыулы көтөүлектәрҙә үҫә. Күпләп үҫкән урындарҙа ул ҡыҙғылт төҫтәге келәмде хәтерләтә. Экспедицияларҙың береһендә юлдашым, был үсемлектең боросҡа ни ҡатнашы бар икән тип, уның япраҡтарын, һабаҡтарын, сәйнәп ҡараны һәм борос атамаһы юҡҡа ғына бирелмәгәнен шунда уҡ танырға мәжбүр булды. Сөнки уның япрағы ла, һабағы ла борос кеүек әсе.

Сәскәләре һабаҡтарының осонда тәлгәш булып урынлашҡан. Сәскә тирәһе 3 - 4 мм, йәшел йәки алһыу төҫтә, һары нөктәләр менән тапланған. Һыу боросо июль айынан алып октябргә тиклем сәскә ата һәм емеш бирә.

Был үсемлекте беҙҙең республиканың бөтә зоналарында ла осратырға мөмкин. Ул айырыуса Нуриман, Архангель, Иглин, Ғафури, Ишембай райондарында күпләп үҫә.

Һыу боросон медицинала ҡулланыу өсөн ерҙән 10 - 15 см бейеклектә ҡырҡып алалар һәм шунда уҡ йоҡа итеп йәйеп киптерергә һалалар. Юҡһа ул ҡарая һәм сифатын юғалта. Был үсемлектең химик составында гликозид, рутин, кверцетин, эфир майҙары, К, А, С, Е, Д витаминдары бар.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

Сипылдаҡ

(Обыкновенная пищуха)



Сипылдаҡтар ғаиләһенә ҡарай. Ғаиләгә яҡынса 9 бәләкәй төркөмсә инә, улар Евразияның территорияһы буйлап иркен таралған, беҙҙең төбәктә сипылдаҡ ҡына теркәлгән. Турғайҙан да вағыраҡ ҡоштар, суҡыштары нәҙек, оҙон, аҫҡа ҡарай бөгөлөп тора. Уларҙың ни тиклем ваҡ икәнен ауырлығы билдәләп тора - бары тик 8-10 грамм ғына. Оҙонлоғо 10-15 сантиметр. Кәүҙәһенең өҫкө яғы сыбар: һоро төҫкә аҡһыл буй һыҙаттар төшкән, аҫҡы өлөшө аҡ төҫтә. Сипылдаҡтың ошолай төҫтә булыуы уны ағас ҡайырыһы менән бер итә, ҡайһы саҡта уны күреүе лә мөмкин түгел. Ҡойроғоноң өҫтө ҡыҙғылтыраҡ. Йырын ҙур тиҙлектә башҡара, ул сағыу итеп сутылдауҙан тора, шым ғына "тсии" тип саҡыра.

Урман зонаһының бар ерендә лә оя ҡороп йәшәй һәм ҡышын да уны ташлап китмәй. Ҡарт парктарҙа ла осрай. Ояны ҡайырыһы ҡубып төшкән, йә ярылған олонло ағастарҙа яһай, һирәгерәк ағас өңөндә лә оялай. 3-8 йомортҡа һала, улар ҡыҙғылт таплы.

Ағас олононан ергә төшмәй генә тамаҡ туйҙыра, олон буйлап спираль буйынса аҫтан өҫкә йөрөй, был ваҡытта ҡойроғоноң ҡаты ҡаурыйҙарына таяна. Ғәҙәттә, тумыртҡалар ғына ошо рәүешле ҡойроғо менән ағас олонона "таянып" эшен башҡара. Иң ҡыҙығы, сипылдаҡ мотлаҡ аҫтан өҫкә ҡарай хәрәкәт итә, ағастың осона барып сыҡҡас, осоп башҡа ағастың төбөнә ҡуна. Ата ҡош менән инә ҡош ағасты "бүлеп" алған: тәүгеһе ризыҡты уның аҫҡы, ә икенсеһе өҫкә яғында эҙләй. Ҡайһы саҡта турғайҙар төркөмөнә ҡараған башҡа ҡоштарҙың тубына ҡушылып та киткеләй.

Туҡыусы турғайҙар

(Ткачиковые)



Турғай һымаҡтар отрядына ҡараған ҡоштарҙың сираттағы ғаиләһе ошолай атала. Был ғаиләгә беҙҙең ауыл-ҡалалар һәм улар тирәләй урынлашҡан урмандарҙа көн иткән 2 төр ҡарай. Уларҙың суҡышы ярайһы киң, был орлоҡтар, иген менән туҡланыуҙары менән бәйле, әммә балаларын бөжәктәр ашатып үҫтерәләр. Ризыҡты ерҙән, һирәгерәк ағас һәм ҡыуаҡлыҡтарҙан таба. Ерҙән һикереп йөрөйҙәр.

Оялары ҡыйыҡ аҫтында, сыйырсыҡ ояларында, ағас өңдәрендә. 4-8 йомортҡа һала. Был ҡоштар тураһында киләһе һандарҙа ентекләберәк һөйләрбеҙ.

М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.
(Дауамы бар).

ПРЕДВЫБОРНАЯ ПРОГРАММА «НОВЫХ ЛЮДЕЙ»

12 шагов к Уфе, в которой хочется жить

УФА — ДЛЯ ЖИЗНИ

1. ДОВЕРИЕ И ДОСТОИНСТВО
   - Открыть бюджет Уфы до конкретного объекта и контракта. Ввести публичную ответственность за сорванные сроки и некачественные работы. Сделать мнение жителей обязательной частью городских решений.
2. УФА БЕЗ ПРОБОК
   - Перестроить маршрутную сеть вокруг потребностей пассажиров. Дать общественному транспорту приоритет на дороге. Развивать электротранспорт и удобные пересадки.
3. ДОРОГИ И ДВОРЫ, КОТОРЫЕ СЛУЖАТ
   - Утвердить открытый пятилетний план ремонта улиц, тротуаров и дворов. Закрепить принцип «одна раскопка — полное восстановление». Сделать зимнюю уборку измеримой и видимой.
4. СИЛЬНЫЕ РАЙОНЫ
   - Создать открытые паспорта районов и микрорайонов. Закрепить районные бюджеты для небольших, но важных работ. Сначала инфраструктура — потом плотная застройка.
5. ЧЕСТНОЕ ЖКХ
   - Создать цифровой паспорт каждого многоквартирного дома. Создать городской центр защиты жителей в сфере ЖКХ. Синхронизировать ремонт коммунальных сетей и благоустройство.
6. ГОРОД ДЛЯ СЕМЬИ
   - Планировать детские сады и школы вместе с развитием жилых районов. Ввести единый стандарт безопасного и удобного детского пространства. Создать городской навигатор помощи семье.
7. ПОЛЕЗНОЕ ОБРАЗОВАНИЕ
   - Ремонтировать школы и детские сады по объективному состоянию. Вернуть кружки, спорт и творчество в шаговую доступность. Связать образование с экономикой Уфы.
8. ЧЕСТНЫЕ ПРАВИЛА ДЛЯ БИЗНЕСА
   - Ввести одно цифровое окно и переходный период для новых городских правил. Открыть муниципальное имущество для новых проектов. Дать местным производителям доступ к рынкам и городским заказам.
9. ЧИСТАЯ И ЗЕЛЁНАЯ УФА
   - Защитить взрослые деревья и восстановить зелёный каркас города. Открыть реки и овраги городу, не разрушая их природу. Сделать вывоз отходов и экологический мониторинг прозрачными.
10. БЕЗОПАСНЫЙ И ДОСТУПНЫЙ ГОРОД
    - Ликвидировать опасные маршруты к школам и детским садам. Создавать непрерывные безбарьерные маршруты. Запустить единый сервис срочных городских неисправностей
11. КУЛЬТУРА, НАСЛЕДИЕ И ТУРИЗМ
    - Защитить историческую среду и дать старым зданиям новую жизнь. Сделать культуру доступной рядом с домом. Сделать Уфу удобной для жителей и гостей.
12. БУДУЩЕЕ В УФЕ
    - Открыть городские данные и задачи для местных разработчиков. Создать пространства для молодёжных, научных и творческих проектов. Ежегодно отчитываться о выполнении программы.

ПАРТИЯ НОВЫЕ ЛЮДИ

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади Избирательному объединению «Региональное отделение в Республике Башкортостан Политической партии «НОВЫЕ ЛЮДИ» на основании ч.1 ст. 65 Кодекса РБ «О выборах».

ПРЕДВЫБОРНАЯ ПРОГРАММА ПАРТИИ

МАНИФЕСТ СПРАВЕДЛИВОСТИ

СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ

ЦЕЛЬ N 1
ЗАЩИТИТЬ ЗАЩИТНИКОВ!
Вы защищаете Родину –
Родина защищает вас!

ЦЕЛЬ N 2
ПЕРЕДАТЬ КУЛЬТУРУ РОССИИ БУДУЩИМ ПОКОЛЕНИЯМ!
Отечественная культура –
это и есть наши традиционные духовно-нравственные ценности, истинные смыслы – фундамент российской государственности!

ЦЕЛЬ N 3
ОСТАНОВИТЬ РОСТ ЦЕН!
Экономика должна служить людям,
а не банкирам и олигархам!

ЦЕЛЬ N 4
ПОВЫСИТЬ ЗАРАБОТНУЮ ПЛАТУ, СДЕЛАТЬ ПЕНСИЮ ДОСТОЙНОЙ!
Бедность в богатой стране –
это тяжелая болезнь власти!

ЦЕЛЬ N 5
ЗАЩИТИТЬ РОССИЙСКИЕ СЕМЬИ!
Семья никогда не станет многодетной, находясь под ипотекой!

ЦЕЛЬ N 6
ДОСТУПНОЕ ЖИЛЬЕ, ЗАМОРОЗИТЬ ТАРИФЫ ЖКХ!
Остановить рост тарифов ЖКХ
как узаконенного средства
бесчестного отъема денег граждан!

ЦЕЛЬ N 7
ВЕРНУТЬ ЛЮДЯМ БЕСПЛАТНУЮ И ДОСТУПНУЮ МЕДИЦИНУ!
Бесплатная и доступная медицина –
базовое условие социального государства!

ЦЕЛЬ N 8
КАЧЕСТВЕННОЕ И БЕСПЛАТНОЕ СОВРЕМЕННОЕ ОБРАЗОВАНИЕ!
Дать детям возможность учиться,
а не натаскивать их на решение тестов!
Развивать национальную
модель образования!

ЦЕЛЬ N 9
МИГРАЦИЮ ПОД ЖЕСТКИЙ КОНТРОЛЬ!
Или мы поддерживаем свои семьи,
или нас заместят приезжие!

ЦЕЛЬ N 10
ГАРАНТИРОВАТЬ ЦИФРОВЫЕ ПРАВА ГРАЖДАН!
Обеспечить достижение цифрового суверенитета и безопасного развития цифровой экономики страны!

МЫ ЗА ДОСТОЙНУЮ ЖИЗНЬ ДЛЯ НАС,НАШИХ ДЕТЕЙ И ВНУКОВ!

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади Избирательному объединению «Региональное отделение Социалистической политической партии СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ в Республике Башкортостан» на основании ч. 1 ст. 65 Кодекса РБ "О выборах»


ПАРТИЯ ПЕНСИОНЕРОВ
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №17
ДАЛЬШЕ - БОЛЬШЕ. ВМЕСТЕ С УФОЙ
РУСЛАН ЗАЙНУЛЛИН
КАНДИДАТ В ДЕПУТАТЫ СОВЕТА ГОРОДСКОГО ОКРУГА ГОРОД УФА ШЕСТОГО СОЗЫВА ПО ОДНОМАНДАТНОМУ ИЗБИРАТЕЛЬНОМУ ОКРУГУ №17


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ





СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ
ЗА ДОСТОЙНУЮ ЖИЗНЬ
Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан по избирательному округу №9 Кожухову Максиму Сергеевичу на основании ч.1ст.65 Кодекса РБ «О выборах».


СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ
ЗА ДОСТОЙНУЮ ЖИЗНЬ
Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан по избирательному округу №1 Каюпову Айнуру Забировичу на основании ч.1ст.65 Кодекса РБ «О выборах».


ПАРТИЯ НОВЫЕ ЛЮДИ
ГАФАРОВ ТАГИР
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №2


18 19 20
СЕНТЯБРЬ 2026


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ


КПРФ
Выборы депутатов в Совет городского округа шестого созыва город Уфа по двенадцатому одномандатному избирательному округу
20 сентября 2026 года
УЛЬМУТАЕВ
Ильдус Наилевич
Сила в правде!


СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ
ЗА ДОСТОЙНУЮ ЖИЗНЬ
Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан по избирательному округу №16 Кубареву Семену Сергеевичу на основании ч.1ст.65 Кодекса РБ «О выборах».


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ

2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ


ЛДПР
18.19.20 СЕНТЯБРЯ
ВЫБОРЫ
ПРИХОДИ НА ВЫБОРЫ!
НЕ ДАЙ УКРАСТЬ СВОЙ ГОЛОС!
ГОЛОСУЙ ЗА КАНДИДАТОВ ОТ
ЛДПР


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ


КПРФ
20 СВОй КАНДИДАТ
ДМИТРИЙ ЛЫСКОВ
УЧАСТНИК СВО
БЮДЖЕТ – ЭТО ДЕНЬГИ ГРАЖДАН, А НЕ ЛИЧНЫЙ РЕСУРС!
ТВОЙ ГОЛОС БУДЕТ УСЛЫШАН!


18,19,20 СЕНТЯБРЯ ВЫБОРЫ!
ТОЛЬКО ЛДПР
+7 (347) 246-30-38, Г. УФА, УЛ. СОВЕТСКАЯ, Д.18


ПАРТИЯ НОВЫЕ ЛЮДИ
СИТДИКОВ ФАНЗИЛЬ
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №15


ЛДПР
18.19.20 СЕНТЯБРЯ
ВЫБОРЫ
ПРИХОДИ НА ВЫБОРЫ!
НЕ ДАЙ УКРАСТЬ СВОЙ ГОЛОС!
ГОЛОСУЙ ЗА КАНДИДАТОВ ОТ
ЛДПР


ПАРТИЯ НОВЫЕ ЛЮДИ
ДАВЛЕТШИН РУСЛАН
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №10


СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ
ЗА ДОСТОЙНУЮ ЖИЗНЬ
Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан по избирательному округу №17 Хайруллину Марату Фидаратовичу на основании ч.1ст.65 Кодекса РБ «О выборах».


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ





СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ
ТАРАСОВА ВИКТОРИЯ
РЕШЕНИЯ, КОТОРЫЕ РАБОТАЮТ НА ЛЮДЕЙ!


18,19,20 СЕНТЯБРЯ ВЫБОРЫ!
ТОЛЬКО ЛДПР
+7 (347) 246-30-38, Г. УФА, УЛ. СОВЕТСКАЯ, Д.18


ПАРТИЯ НОВЫЕ ЛЮДИ
ГАТАУЛЛИН РУСТАМ
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №9


ПАРТИЯ НОВЫЕ ЛЮДИ
ТИМЕРЬЯНОВ ИЛЬШАТ
ИЗБИРАТЕЛЬНЫЙ ОКРУГ №17


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ


2026
18 19 20
СЕНТЯБРЯ


18 19 20
СЕНТЯБРЬ 2026

✓ Улар аяҡ баҫҡанға тиклем баҙар майҙаны һөмһөрө ҡойолған йә ҡайғылы йөҙлө, йә ҡомһоҙ, йә арыған кешеләр менән тулы булһа, был өс изге йән килеп инеү менән бар тирә-яҡ һәм халыҡтың йөҙө көлөүҙән нурланған.

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

ҺАБАНТУЙҘАН - ҠӘЛӘМТУЙҒА!



Әбйәлилдә "Ҡәләмтуй-1" исемле ҙур сара булып уҙҙы. Ниндәй ҡәләмтуй, әбйәлилдәргә һабантуй етмәйме әллә, тиеүселәр булыр? Етмәй, тимәк!

Ҡасандыр әбйәлилдәр башлап ебәргән "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы тураһында ла шулай киреһен уйлаусылар булғандыр, бәлки. Һабанға хөрмәт күрһәткәндә, ҡәләмгә лә иғтибар артырға тейеш. Бигерәк тә бөгөнгө берҙәм булырға ынтылған мәлдә.

Шәхсән үҙем был ҡыҙыҡ атамалы сарала проза һәм драматургия буйынса ойоштороlған түңәрәк өҫтәлдә модератор булараҡ ҡатнаштым. Ике тиҫтәгә яҡын ҡәләм тирбәтеүсене йыйған беҙҙең тирмәлә билдәле яҙыусылар - Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе Айгиз Баймөхәмәтов, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин, "Атайсал" гәзитенең баш мөхәррире Хәйҙәр Тапаҡов, яҡташыбыҙ Гөлшат Әхмәтҡужиналарҙың булыуы фекер алышыуға, тәжрибә уртаҡлашыуға ысын мәғәнәһендә ҙур мәртәбә өҫтәне, аңғәмәбеҙҙе уйлы-хисле итте, сараның был өлөшө гилми-ғәмәли коференцияға тартым булды. Тик ваҡыт тар булыу сәбәпле, оҙон-оҙаҡ һөйләшергә ваҡыт етмәйерәк ҡалды. Киләсәктә (ҡәләмтуй өс йыл һайын үткәреләсәк, тип ҡарар ителде) был башланғыстың ғәмәли яғына иғтибар күберәк булһын ине, тигән теләктә ҡалам.

Радик ӨМӨТҠУЖИН.

ТӨНЬЯҠ ҠОТОПТА...



AY YOLA төркөмө 22 илдең делегацияһы составында "Еңеүгә 50 йыл" атом судноһында Төньяҡ ҡотопҡа сәфәрҙә булды.

AY YOLA төркөмө солисы Ринат Рамаҙанов унда Урал тауҙарында ҡырҡып алған ҡурайҙа "Урал" көйөн уйнаған. "Ҡурай музыка ҡоралы ғына түгел. Ул кешене тәбиғәткә яҡынайта. Ҡурайсы тыуған еренә һөйөүен, тәбиғәттең хозурлығын һүҙҙәр менән әйтә алмағанды ҡурай моңо аша еткерә", - ти Ринат Рамаҙанов.

Шулай уҡ AY YOLA төркөмө яңы йыр премьераһын әҙерләүҙәре тураһында ла мәғлүмәт булды. Яңы йыр "Amanat" тип атала. Ул композиция элеккеләре кеүек үк стилистикала ижад ителә. Музыканттар башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосы сюжеттарынан илһамлана. Клиптың кадрҙарында милли колорит атрибуттары: турһыҡ, ҡумыҙ һәм думбыра, Фәйзи Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре ансамбле артистарында башҡорт костюмдары күренеп ҡала. Йыр тиҙҙән сығырға тейеш, музыканттар әлегә аныҡ ваҡытын әйтмәй.

ТЕЛһӨЙӘР

ЫМБЫЛҒА ӘЛӘКМӘГЕҘ

Элек китап асып, юрау булған. Беҙ ауыр-ауыр һүҙлектәрҙе нимәлер юрау өсөн түгел, ә улар һаҡлаған һүҙҙәрҙе ҡабатлап, көндәлек телмәргә ҡайтарыу өсөн асабыҙ.

Ылығым. Асыҡ йөҙлө, тиҙ аралашыусан, алсаҡ. *Ылығым кеше. Ылығым ҡунаҡ табынды йәнләндереп ебәрә.*

Ылыу. Һыу өҫтөндә йөрөгән оҙон ботло үрмәксе, һыу үрмәксеһе. *Быуа өҫтөндә ылыу йүгерә.* Ылыу тип халыҡ әкиәттәрҙәге бер нисә башлы ҙур йыланды, аждаһаны ла атаған. *Ҡытайҙарҙа ылыуға бәйле байрамдар әлегәсә һаҡланған. Улар ылыуҙы йыл иҫәбенә лә индергән.*

Ымбыл. Был һүҙгә ҡалын һүҙлектә шундай аңлатма бирелә: ымбыл - ул йылға, күл төбөндәге тәрән соҡор, соңғол. Русса воронка тиҙәр. *Һыу ингәндә, ымбылға эләкмәгеҙ. Ашҡаҙарҡай һыуы ымбыл-ымбыл, ҡара көрән ат ҡалҡып йөҙә алмай (халыҡ йыры).*

Ымпы. Һаҡау, ҡайһы бер өндө дөрөҫ әйтә алмаған йәки боҙоп һөйләгән кеше тураһында ымпы тиҙәр. *Ымпы бала. Ымпылыҡты дауалау.*

Ымылжы "сөсө" тигән мәғәнәлә ҡулланыла. Тоҙо йәки башҡа ҡырҡыу тәме юҡ йәки булмаған. *Ымылжы аш-һыу. Ымылжы тәм.*

Шулай итеп, ылығым булайыҡ!

НУРБИКӘ әҙерләне.

Өфө фән һәм технологиялар университеты Социаль һәм демографик тикшеренеүҙәр ғилми лабораторияһының өлкән фәнни хеҙмәткәре Әхмәтова Гөлдәр Фәрит ҡыҙының

әсәһе

Шәмсиямал Солтансәлим ҡыҙының

вафат булып ҡалыуы сәбәпле ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.

Коллегалары.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

11 сентябрь "Еҙнәкәй" (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

16 сентябрь "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем" (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

11 сентябрь "Сказание о семи батырах" (Д.Йосопов, Р.Хакимов), фэнтези. 11:00. 6+

11 сентябрь "Майсара мутлыҡтары" (Х. Ниязи, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 19:00. 16+

12 сентябрь "Выходили бабки замуж" (В. Домрачев), М. Шкетан исемендәге Мари милли драма театры, лирик комедия. 18:00. 6+

15 сентябрь "Чиполлино" (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 11:00. 6+

16 сентябрь "Капитанская дочка" (А.Пушкин, И. Сакаев). 12:00.12+

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

11 сентябрь "Не все коту масленица" (А.Островский), 95-се театр миҙгелен асыу. 19:00. 12+

12 сентябрь "Путь Победы" (Д. Ғәрәева, К. Баязитова). 12:00. 6+

12 сентябрь "Шесть чувств" (Н. Беззубова, А.Верхоземский). 15:00. 6+

12 сентябрь "Не все коту масленица" (А.Островский). 18:00. 12+

13 сентябрь "Буратино" (А.Толстой). 12:00 һәм 15:00. 0+

15 һәм 16 сентябрь "Не все коту масленица" (А.Островский). 12:00 һәм 15:00. 12+

Салауат дәүләт башҡорт драма театры

12 сентябрь "Дюмовочка" (Г.Андерсен, Л. Ниғмәтуллина), әкиәт. 13:00. 0+

БР Милли музейы

11 сентябрь "Татарское наследие: от предков к потомкам" Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылы һәм БР Халыҡтары костюмы көнө айҡанлы күргәҙмәне асыу. 11:00. 6+

11 сентябрь "Цветное платье на плечи, а добрая мысль к сердцу" этнография залдары буйлап тематик экскурсия. 15:00. 6+

16 сентябрь "Семейный мастер-тур: в мире природы" экскурсияһы. 15:00. 6+

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

ҠАРТ ҠӘҘЕРЕН...

йәш белмәй

Ахырызаман булғанда, йүнһеҙ кеше йүнлегә эш өйрәтер.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Өс ҡытай мистигы тураһында булыр был риүәйәт. Уларҙың исемдәре билдәле түгел. Улар халыҡ араһында "Көлөүсе өс изге йән" тигән исем менән билдәле. Был изге йәндәр бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөгән, баҙар майҙандарында туҡтар һәм бар халыҡтың иғтибарын йәлеп итеп, күкрәктән сыҡҡан ҡалын тауыш менән ҡысҡырып көлөр булған. Көлгән саҡта уларҙың йөҙҙәре генә түгел, бөтөн тәне, ҡорһаҡтары хәрәкәткә килгән. Был шул тиклем ҡыҙыҡ күренеш булған: ғәҙәттә, уларға эйәреп, баҙарҙағы бар халыҡ көлә торған булған. Улар аяҡ баҫҡанға тиклем баҙар майҙаны һөмһөрө ҡойолған йә ҡайғылы йөҙлө, йә ҡомһоҙ һәм күҙҙәре ялтыраған, йә арыған кешеләр менән тулы булһа, был өс изге йән килеп инеү менән бар тирә-яҡ һәм халыҡтың йөҙө көлөүҙән нурланған. Ошо осрашыуҙарҙан һуң күптәр үҙ-үҙенде үҙгәртеп була икәненә ышанған.

Көлөүсе өс изге йән Ҡытай буйлап сәйәхәт иткән, кешеләргә көлөргә ярҙам итеп, ауылдан ауылға йөрөгән. Бына бер саҡ бер ауылда изге кешеләрҙең береһе һәләк булған. Ауыл кешеләре: "Хәҙер улар көлә алмаҫ инде. Дуҫтары үлгәс, улар ҡайғынан иларға тейеш бит..." - тип уйлаған. Ләкин дуҫтар өсөнсө изге йәндең үле көүҙәһе тирәләй бейеп, көлөп, байрам итергә тотонған. Ауыл халҡы: "Нисек инде улай, үлгән кешенән мыҫҡыл итеү бит был!"- тип аптыранған. Ләкин ике изге йән уларға былай тип яуаплаған: "Беҙ һәр саҡ кемебеҙ алдан үләсәк икәнен фаразлай инек. Дуҫыбыҙ беҙҙе отто: беҙҙән алда теге донъяға күсте. Беҙ ғүмеребеҙ буйы бергәләп көлдөк. Уны һуңғы юлға башҡа төрлө оҙата алмайбыҙ. Шуға ла беҙ көләбеҙ, бейейбеҙ, байрам итәбеҙ. Ғүмере буйы көлгән кеше менән хушлашыуҙың берҙән-бер юлы был. Беҙ көлмәһәк, ул үҙе беҙҙән көләсәк һәм: "Бына иҫәрҙәр! Былар тағы отолдо!" - тиәсәк. Беҙ уны үлгән тип уйлай ҙа алмайбыҙ. Көлкө нисек итеп үлһен инде!"

Мәйәтте яндырырға ваҡыт еткәс, ауыл халҡы уны йыуындырып, таҙа кейемдәргә төрөргә кәрәклеген иҫкәрткән. Ләкин теге ике изге йән баш тарткан. "Дуҫыбыҙ был йоланы тотмауыбыҙҙы үтенде, - тигән улар. - Уның теләген үтәмәй булдыра алмайбыҙ..."

Шунда көтөлмәгән хәл була. Үлгәнгә тиклем был изге йән кейеме аҫтына төрлө шартлатҡыстар һәм фейерверктар йәшергән икән. Мәйәтте ут өҫтөнә һалыу менән улар тирә-яҡҡа ут сәсрәтеп шартлай башлай. Шул саҡта уның ике дуҫы шатланып бейергә, ырғып һикерергә тотона. Был бик матур күренеш була һәм ауыл халҡы ла был изге йәндәр менән бергә күҙ йәштәре аша көлә, бейей башлай...

Был үлем түгел, ә яңырыу, яңы ғүмер барлыҡҡа килеү була. Сөнки үлем - ул иллюзия. Һәр үлем яңы ишек аса. Әгәр ҙә һеҙ үҙ ҡайғыҡыҙҙы байрамға әйләндерә алһағыҙ, бик тиҙҙән үлемегеҙҙе яңырыуға, яңынан тыуыуға әйләндерә аласаҡһығыҙ. Ваҡытығыҙ барҙа ошо сәнғәткә өйрәнә һалығыҙ..."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Башҡортостан Республикаһы буйынса Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт идаралығында теркәлде:
ПИ №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Ғәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.
Тел.: 8 (347) 226-99-48.
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 10.09.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 10.09.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 11.09.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2487
Заказ - 1606